ИЖТИМАҒИ-СӘЙӘСИ-МӘҘӘНИ ГӘЗИТ

# КискеӨфө

31-6 ғинуар - февраль (һыуығай - шаҡай) 2015

№5 (631)

kiskeufa.ru • blog.kiskeufa.ru • 2002 йылдан башлап сыға • Һатыуҙа хаҡы ирекле

БЫЛ ҺАНДА УҠЫҒЫҘ:

**Мәскәүҙәге студенттарҙы...**

депутат үҙе хәстәрләй



5

**Һырғалаҡ байрамы ойоштороп,**

бала күңеленә тойғо һалайыҡ!



6

**"Киләсәкте тоҡандырыр өсөн...**

үткәндең көлөнән күҙ эҙләйем"



8-9

**Йәш булыуҙың сереме?**

Изге уйлы булыуҙа!



11

**ТВ-программа** 14

***Мөхтәрәм уҡыусыларыбыҙ! 2015 йылдың тәүге яртыһы өсөн гәзитебеҙгә яҙылып, беҙҙең менән дуҫлыҡты дауам итеүселәргә сикһеҙ рәхмәтлебеҙ. Был юлы ла һеҙгә танһыҡлығыҙҙы, ихтыяжығыҙҙы ҡандырыр, сәмләндерер, рухландырыр мәғлүмәттәр еткереүҙе дауам итербеҙ, тип ышандырабыҙ. Тағы шундай мәғлүмәт: 1 февралдән 31 мартҡа тиклем быйылғы йылдың икенсе яртыһы өсөн 50665 индекслы "Киске Өфө"гә ваҡытынан алда һәм ташламалы хаҡ (513 һум 72 тин) менән яҙылыу башланды.***

## ӘЙТ, ТИҺӘГЕҘ...

### Һуңғы йылдарҙағы һауа торошоноң тотороҡһоҙлоғо ни менән аңлатыла? Йәшәйешебеҙ рәүешенә уның тәьҫирен нимәлә күрәһегеҙ?

***Зиннур КҮСӘРБАЕВ, хаҡлы ялдағы агроном, фенолог:*** Борон-борондан ата-бабаларыбыҙ йылдың нисек килерен алдан әйтә алған, үҙҙәренә генә мәғлүм билдәләр буйынса көн торошон аныҡ фаразлаған. Әлбиттә, был йәһәттән улар үҙҙәренең күп йыллыҡ күҙәтеүҙәренә таянған, унан һуң, Ҡояш, Ай һәм йондоҙло күккә ҡарап та һауа торошон көн алдын "уҡый" белгән. Ер кешеһе - игенсенең хеҙмәт эшмәкәрлеге, үҙегеҙгә мәғлүм, көн торошо менән айырылғыһыҙ бәйле булғанлыҡтан, мин дә байтаҡтан бирле үҙемсә һауа торошоноң көндәлеген алып бара башлағайным, сөнки, агроном булараҡ, йылдың нисек килеүен алдан күҙаллау сәсеүгә йәки ураҡҡа ҡасан төшөүҙе билдәләү генә түгел, бәлки, тотош уңыш яҙмышын ниндәйҙер кимәлдә контролдә тотоп, һауа шарттарының көтөлмәгән "сюрприздарына" әҙер булырға ярҙам итә, тип ҡарай инем. Хәҙер мин хаҡлы ялда, ләкин элекке ғәҙәт буйынса фенологик күҙәтеүҙәр алып барыуҙы дауам итһәм дә, һуңғы йылдарҙа бының ниндәйҙер анализдар яһап, төплө бер фекергә килеүҙә файҙаһы юҡлығын күрәм, сөнки һауа торошонда, тимәк, планетабыҙҙың климат торошонда тотороҡлолоҡ юғала, ул көтөлмәгән үҙгәрештәргә дусар ителә бара - тәбиғәттең үҙенә генә хас эске тәртиптәре, ҡанундары боҙола. Бының эҙемтәләре ауыл хужалығы өлкәһенә емергес тәь-ҫир яһай.

Хәҙер, элекке кеүек, бер йыл ҡоро килһә лә, икенсе йылына нормаль, уңышлы йыл булыр, тип өмөтләнергә тура килмәй. Ҡоролоҡ 3-4 йыл рәттән килеүе лә бик ихтимал. Һуңғы йылдарҙа, ғөмүмән, ер дымға туйына алмай. Йылғалар һайыға, шишмәләр ҡорой, сөнки урмандар ҡырыла, ә һәр ҡырҡылған ағас урынына яңыһын ултыртыу тигән нәмә юҡ. Элек, совет заманында ерҙең ундырышлылығын күтәреү маҡсатында һәр төрлө агротехник саралар үткәрелә ине. Мәҫәлән, быйылғылай ҡар күп яуған ҡайһы бер төбәктәрҙә запас дым туплау йәһәтенән ҡар тотоу эштәре яҙыҡ булмаҫ ине, ләкин хәҙер бындай эш һанға һуғылмай. Икенсенән, дингеҙ кеүек йәйрәп ятҡан иген баҫыуҙары ла булмағас, был бер кемгә лә кәрәкмәйҙер, әлбиттә. Өҫтәүенә, уның ниндәйҙер сығымдар талап итеүен дә иҫәпкә алһаң, бигерәк тә.

Һауа торошоноң ҡырҡа үҙгәреп тороуы тәбиғәткә генә һәләкәт менән янап ҡалмай, кеше сәләмәтлегенә лә бик насар йоғонто яһай. Мәҫәлән, ҡан баҫымы юғары йә түбән осраҡтарҙа, быуын сирҙәре, астма менән ауырыған кешеләр ҡапыл үҙгәреүсән һауа торошон ауыр кисерә. Ундай ваҡытта был кешеләр ни эшләргә кәрәклеген яҡшы белергә, юғалып ҡалмаҫҡа, ғауғаға бирелмәҫкә тейеш. Һауа торошоноң шулай килделе-киттеле булыуының төп сәбәптәренең береһе - кешелектең экологияға ҡаршы уйһыҙ-һаҡһыҙ эш итеүе, тип уйлайым.

(Дауамы 2-се биттә).

## ШАҒИР ҺҮҘЕ




### СЕБЕР

*Башҡорт һарҡындыһы менән тулған Себер.*
*Р. Түләк*

*Тыуған ерҙә тарып йөрөгәнсе*
*Хәйерселек тигән йәбергә,*
*Аяҡ тартмаҫ борон ҡәбергә –*
*Сығып китә ирҙәр Себергә*

*Ағастар гел ылыҫ-ҡырыҫ яҡта*
*Милләтемдең аҫыл ирҙәре.*
*Туңған ерҙә уңа, тыуған ерҙә*
*Килешмәгән ҡайһы ерҙәре?*

*Ер яралған дәүер ҡатламдарын,*
*Уятҡандар Себер киңлеген,*
*Уйламайҙыр тик үҙҙәрен генә,*
*Уйлайҙарҙыр илдең көрлөгөн дә –*
*Һынай заман кемдең кемлеген.*

*Тыштан ғына һалҡын күренә ул,*
*Себер ере эстән ут-ялҡын.*
*Һаҙлыҡтарға батып, туңып-ҡатып*
*Йөрөһәң дә, Себер – үҙ, яҡын.*

*Тыуған ерҙә арып йөрөгәнсе,*
*Тамаҡ ялына ла эш тапмай,*
*Атайлығын ирҙең, ирлеген дә*
*Себерҙәрҙә түккән тир һаҡлай,*
*Себерҙәрҙә түккән тир яҡлай.*

12+

✓ Ә икенсе берәүҙең өйөндә генә ултырып та һауа температураһы һәм атмосфера баҫымы тирбәлеүен шундуҡ һиҙеүе һәм үҙен насар тоя башлауы ихтимал. Бындай кешеләрҙе хатта тере барометр тип тә йөрөтәләр.



БЫЛ АЙҘА...

# ПУШКИН МЕНӘН РӘМИ АЙЫ



**Аҙ булһа ла, күп булһын, тигәндәй, иң сонтор, мәгәр иң ҡыҫҡа ай - февраль дә килеп етте. Февраль, мин һыйыр мөгөҙөн һындырырмын, тигән тиме? Фенологтар билдәләүенсә, был иң һыуыҡ, әсе елле "уҫал" ай.**

Бәлки, шуғалыр ҙа, февралдә тыуғандар тормоштоң әсе еленә бирешмәүсән, көслө ихтыярлы шәхестәр булып һынлана күҙ алдында. Һуң, шулай булмайса, үҙегеҙ ҡарағыҙ - кемдәрҙең юбилейҙары был айҙа: Һәҙиә Дәүләтшина (тыуыуына 110 йыл), Булат Ишемғол (115 ), Хәбир Ғәлимов (110), Ҡадир Даян (105), Мөхәмәт Арыҫланов (105), Ғабдулла Ғиләжев (85), Закирйән Ханов (95 йыл)... Быйыл "түңәрәк" йәштәре билдәләнмәһә лә, тағы ла әллә күпме шәхестәр тыуған шаҡ-айҙа. Улар араһында республиканың тәүге Президенты Мортаза Рәхимов кеүек сағыуҙары ла, аты-даны ул тиклем яңғырап тормаһа ла, көҙимге тормошта һоҡланырлыҡ донъя көтөп, балалар тәрбиәләп, ә инде иң мөһиме, яратҡан, бала саҡтан хыялланған һөнәренә эйә булып, маҡсатына тоғро ҡалып, аң-белемен даими камиллаштырып йәшәүсе замандаштарыбыҙ байтаҡ. Һәм әйтергә кәрәк: ябай ғына кешеләр түгел улар, ә бөйөк маҡсаттар ҡуйып, шуға ынтылып, эргә-тирәләге ғәҙелһеҙлектәргә (ҡайһы саҡ хатта "ел тирмәндәре"-нә лә!) ҡаршы көрәшеп, йәшәйешебеҙҙе яҡшыға үҙгәртергә ынтылыусы йәндәр улар - прогресс, позитив өсөн тыуғандар.

Халҡыбыҙ рухиәтенә, уның тел-моң хазинаһына ғашиҡ йәндәр юбилярҙарыбыҙ. Шуларҙан ике гүзәл зат - Башҡортостандың халыҡ артисы, йырсы Роза Аҡкучукова (65 йәш) һәм БР атҡаҙанған матбуғат һәм киң мәғлүмәт хеҙмәткәре, Ш. Бабич исемендәге республика йәштәр премияһы лауреаты, яҙыусы Фәрзәнә Аҡбулатова (55), композитор, БР атҡаҙанған сәнғәт эшмәкәре Айрат Ҡобағошов (65) илһамланып эшләйҙәр, замандаштарын яңынан-яңы ижад өлгөләре менән ҡыуандырып йәшәйҙәр. Әйткәндәй, тағы бер һыуғояр оло ғүмер байрамын билдәләй: Рәсәйҙең атҡаҙанған һәм Башҡортостандың халыҡ артисы Хәмит Яруллинға быйыл - 80 йәш.

Иҫтәлекле көндәрҙән февралдә Бөтә донъя яман шеш сирҙәренә ҡаршы көрәш (4 февраль), Рәсәй фәне һәм Аэрофлот (8 февраль) көндәре, А.С. Пушкиндың хәтер көнө (10), Бөтөн донъя ауырыуҙар көнө (11), Изге Валентин һәм шул уҡ көндө яугир-интернационалистарҙың хәтер көнө. Бөтөн донъя мәрхәмәтлек көнө (17), шунан бер көн үткәс, Көнсығыш календары буйынса яңы күк һарыҡ йылын ҡаршылаясаҡбыҙ. Әйткәндәй, ошо уҡ көндө (19) Бөтөн донъя киттар көнө билдәләнә. Күрәһең, планетабыҙҙа улар ҙа әҙ ҡалып баралыр...

Ер йөҙөндә күпме төрлө халыҡ бар! Һәм уларҙың һәр береһе, айырыуса аҙ һанлылар иҫәбенә ингәндәре, туған телдәре йәшәгәнсе йәшәйәсәк, сөнки туған телһеҙ халыҡ юҡ. Әсә телдәрен һаҡлау, ҡәҙерләүҙең мөһимлегенә тағы бер тапҡыр иғтибарҙы йүнәлтеү маҡсатында 21 февралдә (быйыл 15-се тапҡыр) Бөтөн донъя туған телдәр көнө үткәрелә. Әсә теле ҡәҙерен, уның көс-ҡөҙрәтен, ынйылай гәүһәрлеген йырлап, ижады менән үҙенә һәйкәл ҡуйған шағирыбыҙ Рәми айы ла ул февраль. Гәрсә быйылғы рәсми календарҙарҙа билдәләнмәһә лә, был айҙың ун икеһе лә, егермеһе лә - йөрәгебеҙ түрендә. Бөйөк Пушкин кеүек үк, бөйөк Рәмиҙе лә үлемһеҙлеккә алып китте буранлы февраль...

23 февраль - Ватанды һаҡлаусылар көнө - календарҙа ҡыҙыл дата булараҡ билдәләнә.

**Фәүзиә ИҘЕЛБАЕВА.**

ӘЙТ, ТИҺӘГЕҘ...

## Һуңғы йылдарҙағы һауа торошоноң тотороҡһоҙлоғо ни менән аңлатыла? Йәшәйешебеҙ рәүешенә уның тәьҫирен нимәлә күрәһегеҙ?



(Башы 1-се биттә).

***Инбер ЯППАРОВ, география фәндәре кандидаты, БДУ доценты:*** Тәбиғәттең төп компоненты булған климат циклдарға бүленеп үҫешә. Һәр бер цикл, Ҡояш әүҙемлегенә бәйле, һауа температураһының күтәрелеүе һәм түбәнәйеүе менән характерлана. Климат үҙгәрештәре 11 йыл һайын ҡабатланып тора. Әлеге цикл яңыраҡ ҡына, 2014 йыл тамамланып тора. Был осорҙа, үҙегеҙ шаһит булдығыҙ, һауа температураһы юғары кимәлдә булды, ләкин ошоноң менән бәйле, климат йылына, тигән фараз менән мин килешмәйем, сөнки барлыҡ үҙгәрештәр технология менән бәйле. Әгәр климат ысынлап та йылына икән, донъя океаны кимәленең күтәрелеүен күптән теркәгән булырҙар ине, ләкин әлегә бындай мәғлүмәт юҡ. Ни өсөн тигәндә, әгәр совет осоронан алып барлыҡ боҙҙарҙы иретһәк, донъя океаны 54 метрға күтәрелер ине, тигән фараз йәшәп килеүе билдәле. Боҙлоҡтар ирей икән, ҡайҙа һуң ул һыу? Ниңә ул климат циклы буйынса күсеп, беҙҙең йылға-күлдәр кимәленең күтәрелеүенә сәбәпсе түгел? Һуңғы 10-15 йыл эсендә көнбайыш Башҡортостанда, ысынлап та, июнь айы температураһы 2 градус самаһына күтәрелде, әммә был климат йылыныуы менән бәйләнмәгән. Беҙгә хәҙер яңы климатик белешмә сығарырға кәрәк, тип уйлайым, сөнки климат ҙур үҙгәрештәр кисерә. Бында кешелек эшмәкәрлегенең дә роле бик ҙур. Мәҫәлән, әгәр ҙә картаға ҡараһаҡ, беҙҙең Башҡортостан көнбайыштан диңгеҙҙәр менән уратып алынған һымаҡ. Кама, Волга йылғалары һыуһаҡлағыстары тап шул диңгеҙҙе хасил итә лә инде. Бына шул диңгеҙҙең тәьҫирен әле бер кем дә өйрәнмәгән. Минеңсә, ошо дымлы һауанан күтәрелгән күҙгә күренмәҫ турбулент кәртә океандарҙан килгән дымлы һауаны беҙгә ебәрмәй тота. Шуның һөҙөмтәһендә беҙгә ямғырҙар килеп етә алмай. Йылғаларҙың күпмелер өлөшө һыуҙы быуға әйләндерер өсөн китергә тейеш. Йылылыҡ һыуҙы быуға әйләндерер өсөн сарыф ителмәгәнгә күрә, беҙҙә эҫе. Ул ваҡытта ҡышҡы һыуыҡтарҙы ҡайҙа ҡуябыҙ һуң? Һуңғы ваҡытта температураның 30 градусҡа тиклем түбәнәйеүе беҙҙең өсөн ғәҙәти хәлгә әүерелде. Әлеге ваҡытта беҙ температураның түбәнәйеүе циклында булһаҡ, 20-се йылдарға ул үҙенең ғәҙәттәге уртаса кимәленә ҡайтасаҡ.

***Фәрзәнә МӘРҘӘНШИНА, медицина хеҙмәткәре:*** Һауа торошондағы киҫкен үҙгәрештәрҙең сәбәптәренә төплө аңлатманы белгестәр бирергә тейеш, тип уйлайым, сөнки был бик ҡатмарлы күренеш һәм уның сәбәптәре күп төрлө. Күп кенә сығанаҡтарҙа һауа торошондағы киҫкен тирбәлештәр глобаль йылыныу менән бәйле килеп тыуған парник эффекты арҡаһындағы климат үҙгәрештәре менән аңлатыла. Ҡояш әүҙемлеге көсәйеүе лә Ер йөҙөндә һәр төрлө аномаль күренештәр барлыҡҡа килеүгә сәбәпсе тип ҡарала (магнит бурандарынан алып, ҡоролоҡ, ғәрәсәт-дауылдар, һыу баҫыуҙар, озон ҡатламының тишкеләнеүе һ.б.). Бындай күренештәрҙең кешенең йәшәү эшмәкәрлегенә туранан-тура тәьҫире күптән иҫбатланған. Көн торошондағы киҫкен үҙгәрештәр ниндәйҙер кимәлдә һәр кемгә тәьҫир итә, тик ҡайһы берәүҙәр (ҡағиҙә булараҡ, улар һау-сәләмәт кешеләр) уны бар тип тә белмәй. Мәҫәлән, шундай кешеләр була: ваҡыт һәм климат поясын улар бик еңел кисерә, ниндәй климат шарттарында ла үҙҙәрен уңайлы тоя. Ә икенсе берәүҙең өйөндә генә ултырып та һауа температураһы һәм атмосфера баҫымы тирбәлеүен шундуҡ һиҙеүе һәм үҙен насар тоя башлауы ихтимал. Бындай кешеләр метеошарттарға ныҡ бәйле була, уларҙы хатта тере барометр тип тә йөрөтәләр. Бындай кешеләр күбеһенсә йөрәк-ҡан тамырҙары, тын юлдары системаһы, баш мейеһе, неврастения, аллергия, быуын сирҙәре менән яфалана. Ундайҙар өсөн үҙҙәрен яҡшы тоя торған нормаль атмосфера баҫымы - терегөмөш бағанаһында 750 мм. Шунан түбәнәйә йә күтәрелә башлаһа, ҡан баҫымы һәм йөрәк сирлеләрҙең тыны ҡыҫыла, һауа етешмәй башлай. Бынан ике аҙна элек кинәт кенә арабыҙҙан китеп барған талантлы драматург Флорид Бүләковтың фейсбуктағы ике юллыҡ ҡына һуңғы яҙмаһы күҙ алдынан китмәй: "Бындай киҫкен үҙгәрештәр миңә үлтергес тәьҫир итә. Үлек кеүек ятам. Тереләй күмелеп ҡуйыуҙан ҡурҡҡан Гоголде иҫкә төшөрәм. Хоҙай һаҡлаһын!"

...Ә тереләргә йәшәргә кәрәк. Һауа торошоноң теләһә ниндәй үҙгәрештәренә лә бирешмәҫлек итеп үҙеңде әҙерләргә, бының өсөн иһә ябай ғына тойолған һауыҡтырыу саралары үҙләштерергә кәрәк. Махсус әҙәбиәттә, мәҫәлән, метеошарттарға бәйле кешеләр өсөн 11 төрлө ана шундай һауыҡтырыу саралары тәҡдим ителә: сынығыу, йөҙөү менән шөғөлләнеү, йәйәү йөрөү йә йүгереү, саф һауала йышыраҡ булыу, дөрөҫ туҡланыу, яҡшы йоҡо, хис-тойғонды көйләү, витаминдар ашау, зарарлы ғәҙәттәрҙән арыныу, сезонлы аҙыҡ-түлеккә өҫтөнлөк биреү, кәүҙә ауырлығынды нормала тотоу. Күренеүенсә, быларҙы ғәмәлгә ашырыуы ауыр түгел, тик бына уны даимиға, йәшәү рәүешеңә әүерелдерер өсөн түҙемлек, тырышлыҡ кәрәк. Ә шулай ҙа үҙегеҙҙе насар тояһығыҙ икән, һауа торошо киҫкен үҙгәргән мәлдәрҙә хәрәкәт әүҙемлегегеҙҙе сикләп тороу кәрәк булыр. Үҙегеҙҙе физик һәм эмоциональ көсөргәнештән арындырығыҙ. Ҡан баҫымығыҙҙы тикшереп тороғоҙ, кәрәк икән, табип яҙып биргән дарыуҙарҙы йәки тынысландырыусы препараттарҙы ҡулланығыҙ.

**Фәүзиә МӨХӘМӘТШИНА яҙып алды.**

## НИМӘ? ҠАЙҘА? ҠАСАН?

✓Башҡортостан Башлығы Рөстәм Хәмитов яҙғы баҫыу эштәренә әҙерлек мәсьәләләре буйынса киңәйтелгән ултырыш үткәрҙе. Рөстәм Зәки улы быйыл яҙғы баҫыу эштәрен ҡулайлы ваҡытта атҡарып сығырға кәрәк, тип билдерҙе. Шулай уҡ урындағы үҙидара органдарына ауыл хужалығы предприятиелары менән ерҙе оҙайлы ваҡытҡа ҡуртымға биреү буйынса килешеүҙәр төҙөүҙе әүҙемләштерергә ҡушты. Был ер ҡануниәтенең үҙгәреүенә, шул иҫәптән һәр гектар өсөн субсидиялар бүлеүҙең яңы ҡағиҙәләрен индереүгә бәйле.

✓Республика Башлығы Рөстәм Хәмитов Төркиә Республикаһының Рәсәйҙәге Ғәҙәттән тыш һәм Тулы хоҡуҡлы илсеһе Умит Ярдым менән осрашты. Илсе Рөстәм Хәмитовты Мәскәүҙәге Төркиә вәкиллегенә Башҡортостандың презентацияһын үткәрергә саҡырҙы, ШОС саммитына һәм уға әҙерлек эштәрен уҙғарыуға ҡағылышлы һорауҙарҙы ла ҡарарға тәҡдим итте һәм Анкара губернаторының рәсми саҡырыуын тапшырҙы.

✓Башҡортостан Башлығы Рөстәм Хәмитовтың "Газпром" асыҡ акционерҙар йәмғиәтенең үҙәк офисында компания идараһы рәйесе Алексей Миллер менән эшлекле осрашыуы үтте. Яҡтар Хеҙмәттәшлек тураһында килешеүҙе тормошҡа ашырыу барышын тикшерҙе. Шулай уҡ республикала газ үткәреү хаҡында ла һүҙ барҙы. 2006-2014 йылдарҙа "Газпром" ошо маҡсатҡа 3,2 миллиард һум аҡса бүлгән. Был аҡсаларға, атап әйткәндә, 18 ҡасаба араһында 366 километр оҙонлоғонда газ үткәргес һалынған. 2015 йылда "Газпром" туғыҙ газ үткәргес һалыуға һәм тағы ла дүртәүҙе төҙөү өсөн проект-смета документтарын әҙерләүгә 300 миллион һум йүнәлтергә ниәтләй.

✓Әҙәбиәт йылында Башҡортостанда үтәсәк сараларҙың күбеһе Бөйөк Ватан һуғышында Еңеүҙең 70 йыллығына бағышланған. 2 февралдә Еңеү паркында Бөйөк Еңеүҙең 70 йыллыҡ юбилейы сиктәрендә марафон башлана. Йыл дауамында республиканың Мәғариф министрлығы Еңеүҙең 70 йыллығына арналған шиғыр һөйләүселәр конкурсын уҙғарасаҡ. Әҙәбиәт йылының саралар планына ярашлы, масштаблы ваҡиғаларҙың күбеһе юбилей датаһы билдәләнгән май айына тап килә. Ҡайһы бер ижади проекттар республиканың күренекле әҙиптәренә арнала.

**✓ Бөтмәҫ-төкәнмәҫ сағыу рекламаларға теклəп барғансы, бына ошондай матур, фәһемле, тапҡыр әйтемдәрҙе уҡып барыу матур тойғолар ҡалдыра икән. Кемдәр былай ғына уҡып барыр, кемдер уйлана төшөр, кемдер һабаҡ алыр.**



ШАҢДАУ

# БЕРҘӘМЛЕК МЕНӘН КӨСЛӨ БУЛАЙЫҠ!



**Ун ике йыл буйы алдырып, яратып уҡыған "Киске Өфөнөң" быйылғы 1-се һанында замандашым Фәтих Муллағолов ҡәләме яҙған мәҡәлә сәбәпсе был сығышыма. "Беҙ тҙемле лә ул, ә башҡалар?" тип аталған бәләкәй генә яҙмаға милләт яҙмышы тураһында оло борсолоу һыйған.**

"Толерантлы булыу-булмауҙың төбөндә бер ғилләә ятыуын да шәйләмәй булмай. Һәр кем толерантлы була алмай. Күңеле керһеҙ, изгелекле, яҡты уйлы, иманлы һәм дә тәбиғәте менән юғары мәҙәниле Аллаһ балалары өсөн генә хастыр был сифат. Ахырҙа шулай тип күңелдә йыуатырға ла, бөтөн был ығы-зығыға сал тарихлы милләттәргә генә хас олпатлыҡ, зирәклек, уйсанлыҡ, бөйөклөк үрҙәренән күҙ ташлап, көләмһерәп ҡуйырға ғына ҡала, күрәһең, халҡыма..." - тип дөрөҫ әйтә Фәтих ҡусты. Башҡорттоң түҙемлеген, киң күңеллелеген, толерантлы булыуын ҡайһы берәүҙәр дөрөҫ ҡабул итмәй икәнен ишетеп-күреп торабыҙ. Интернеттың ҡайһы бер сайттарында тарихи шәхестәребеҙҙе, аҡыллы, белемле, ҡурҡыу белмәҫ зыялыларыбыҙҙы нисек кенә хурламайҙар, ниндәй генә исемдәр таҡмайҙар - бысраҡ һыу менән ҡойоноп сыҡҡандай булаһың унан...

Толерантлыҡ ике яҡлы булырға тейеш, тигән хәҡиҡәт үткән быуаттарҙа ғына ҡалдымы икән ни, тип тә уйлап ҡуяһың ҡайһы саҡта. Мәҫәлән, бөйөк этнограф һәм тарихсы Сергей Руденкоға беҙ оло рәхмәтле - уның алдан күрә белеүе, фәнни һәм тарихи намыҫы, толерантлығы, башҡортҡа булған ихтирамы өсөн. Был ғалим халҡыбыҙҙың меңәр йылдар һинауын үткән цивилизацияһын ентекләп өйрәнеп, дәлилләп, үҙенең "Башҡорттар" тигән киң күләмле хеҙмәтенә теркәгән. Был китапты беҙ өйрәнергә һәм ҡәҙерләргә тейешбеҙ. Ҡыҙғанысҡа ҡаршы, 1917 йылдың ҡанлы октябре был цивилизацияны емерҙе, уның тамырҙарын өҙҙө һәм еребеҙгә ҡасып йә ҡунаҡ булып килеп һыйынған милләттәрҙең ҡайһы бер вәкилдәре ошо цивилизацияны белмәй, белергә лә теләмәй. Тимәк, ике яҡлы толерантлыҡ шулай юҡҡа сыға.

Хәйер, үзебеҙҙең милләт вәкилдәре лә үҙ тамырҙарын, үҙ тарихын өйрәнергә тырышып ятмай. Ә бит беҙҙең буталсыҡ, тәңре йөндән айырып, мөлгә һәм малға табынып йәшәгән дәүерҙә Рәсәйҙең күп милләттәре үҙ тамырҙарын эҙләй, тарихын вәҡыт һәм заман, сәйәсәт талаптарына яраҡлаштыра. Тик был эҙләнеү фәнгә, тарихҡа таянһын, башҡа халыҡтарҙың рухи доньяһына, үткәненә һәм бөгөнгөһөнә һаҡсыл булырға өйрәтһен әҙәмдәрҙе, тип теләге килә. Былдай эштә ҡырағай баҙар ҡанундары түгел, тап ана шул толерантлыҡ хакимлыҡ итергә тейеш.

Тарихыңды өйрәнеү кәрәк. Исмаһам, ана шул һине хурларға маташыусы наҙандарҙың һүҙен өҫкә сығармау, уларға лайыҡлы яуап биреү өсөн булһа ла. Ә бит хәҙер быуның өсөн мөмкинлектәр, тарихи сығанаҡтар тулып ята. 7 томда "Башҡорт халҡы тарихы" баҫылып сыҡты. Былдай томдарҙы уҡырға түҙемлек етмәгәндә лә, тормошта осраған тарих ярсыҡтарына иғтибар итергә, шуларҙан сығып һығымталар яһарға ла була бит. Ошо арала ғына халҡым тарихына ҡағылышлы ошондай факт-күренештәргә юлығыуымды телгә алып үтәйем:

... "Истоки" гәзитенең 2014 йылдың 42-се һанында Иршат Йыһанбирҙиндың "История манихейства в Башкортостане" исемле мәҡәләһе баҫылып сыҡҡайны. Шунда яҙылғандар мине шаҡ ҡатырҙы. Баҡтиһәң, беҙҙең эраның III быуатында Мани бәйғәмбәр тараткан Манихей дине Персияла, Урта Азияла, Һиндостанда киң билдәле булған. Мани һәм уның диндәштәре дини аяттарын төрлө телдәрҙә яҙып, төрлө илдәрҙә тараткан. Был тире, туҙға яҙылған аяттарҙы "Фәтеүә" (русса "фетва") тип атағандар. Көйөргәҙе районында урынлашҡан минең кескәй генә туған ауылым Илкәнәйҙә был һүҙҙе беҙ бала саҡтан белдек һәм ҡулландыҡ. Кешегә саҡ ҡына аҡыл өйрәтә башлаһаң, "Йә, туктат шул фәтеүә һатыуыңды", тип көлә торғайнылар. Тимәк, III быуатта минең туған халҡым фәтеүәләрҙе белгән. Уларҙы ҡабул иткәнме, юҡмы, әммә белгән, ишеткән.

...Бер көндө Башҡортостан юлдаш каналын асып ҡарап ултырһам, дивандан йығылып төшә яҙҙым. Әбйәлил районының ҡышҡы ҡарлы юлы буйлап санала тере Скиф елдерә - башында скиф ҡолаҡсыны, өҫтөндә скиф халаты. Баҡтиһәң, минең ырыуҙаш тамьян һеңлекәш тоткан да боронғо скифтарҙың тарихта һаҡланған милли кейемдәрен кейеҙҙән һуғып алған. Тимәк, һеңлекәш был ысулды үҙенең скиф ҡанында һаҡлаған.

...Боронғо ҡаласыҡ "Арҡайым" асылғас, ғаиләм менән шунда барҙыҡ. Иртәнге 8-ҙә һөт алырға баҙарсыҡҡа барһам, һөт һатҡан һеңлекәш миңә саф башҡортса "Арыумы?" тип өндәште. Тимәк, 4 мең йыл элек таныш булмағандарҙан башҡортса "Һин арийы?" тип һорағандар...

Тамыры тәрән ағас тиҙ ҡоромай, уның олоно ныҡ була, ҡортҡа ла ҡапыл ғына бирешеп бармай икәнен беләбеҙ. Тик, ниңәләр, башҡорт яңғыҙ сағында көслөрәк. Өс башҡортто айырым алып ҡараһаң - һәр береһе батыр. Бергә уҡмаштырып, гәләмә итеп бәйләп ҡара - бер нәмә лә килеп сыҡмай. Беҙҙең гәзиз илебеҙҙә иркен йәшәгән башҡа милләттәр татыулығы, бер-береһенә ярҙамсыллығы, тамыр йәйергә тырышыуы менән ота. Бергә эшләгәндә берберенде батырып, бергә йәшәгәндә бер-береңә аҡырып, XXI быуатта көслө лә, бай ҙа, ихтирамлы ла булып булмай. Беҙҙең берҙәмлек борондан килә. Башҡорттар ошо хәҡиҡәтте онотторға тейеш түгел.

**Тимер НИӘТШИН.**
**Мәләүез ҡалаһы.**

УЙЛЫҒА - УЙ

# КҮҘГӘ ЭЛӘКТЕРҺӘҢ...
## һүҙгә күсә




**Күптән түгел миңә эш сәфәре менән Пермь ҡалаһына барып ҡайтырға насип булды. Шуныһы аптырамалы, кеше йөрөп тора икән, әй. Үҙегеҙ уйлап ҡарағыҙ әле, Өфөнән Пермгә көнөнә ике автобус йөрөй, ә икеһе лә тулы китә, имеш. Бер әбей әйтмешләй, ярай, мин ҡыҙыма китеп барам, ә башҡалар нимәгә ҡотороп йөрөй икән…**

Бына, ниһайәт, Пермгә килеп еттек. Бер аҙ яңы ҡала һауаһын һулап торғас, автобус туҡталышына ҡарай юлландым. Тәү ҡарамаҡҡа был ҡала башҡаларҙан әллә ней айырылмаған төҫлө. Урам тулы мыжғып торған кешеләр, геүләп торған төрлө-төрлө машиналар, бейек-бейек йорттар...

Ә шулай ҙа айырма бар икән. Быны мин автобустарға ингәс тә күрҙем: уларҙың салоны төрлө-төрлө ала-сыбар рекламалар менән сыбарланмаған. Улар урынына автобус салонына күңелде арбарлыҡ бер-ике матур әйтемдәр яҙып элengән. Миҫал өсөн шуларҙың бер нисәүһен килтереп китәйек әле.

Атай-әсәйеңдә хөрмәт ит - улар хөрмәткә лайыҡ. Үҙ ҡайғың ҡайғы түгел - бала ҡайғыһы ҡайғы. Олоно ололап өйрән - ул көндәр һиңә лә килер. Сaңғысыларҙы телевизорҙан ҡарап әрләп ултырма - үҙең саңғы кейеп, бер аҙ йөрөп кил. Бала шатлығы - йөрәккә дауа. Бер-беребеҙгә иғтибарлы булайыҡ - бер-беребеҙгә ҡарап йылмайып һөйләшәйек. Иртәгә көн хөрт була икән, тип, артыҡ ҡайғырмайыҡ - бөгөнгө көндөң матурлығын күрә беләйек. Атай-әсәйеңдең хәлен белешергә онотһаң, әле һуң түгел - телефоның кеҫәңдә бит. Китапханаларға күберәк йөрөйөк - китап уҡыуҙы онотоп барабыҙ түгелме икән. Йәшлек мәле бер була - уны тәмәке, һыра, наркотиктарға алыштырмайыҡ. Оло кешегә күп кәрәкмәй - уға бер йылы һүҙ ҙә етә.

Бөтмәҫ-төкәнмәҫ сағыу рекламаларға теклəп барғансы, бына ошондай матур, фәһемле, тапҡыр әйтемдәрҙе уҡып барыу матур тойғолар ҡалдыра икән. Бында уҡылған әйтем-мәҡәлдәрҙең барыһы ла таныш, әлбиттә, әммә уларҙы тап автобус салонына яҙып, һәр кем уҡырлыҡ, аңына һеңдерерлек мөмкинлек тыуҙырылыуы ҡалай шәп күренеш. Былдай һәйбәт эште, бәлки, беҙгә лә отоп алырға кәрәктер? Кемдәр былай ғына уҡып барыр, кемдер уйлана төшөр, кемдер һабаҡ алыр. Әҙме ней һуң үҙебеҙҙә төплө фекерле һабаҡ алырлыҡ тос халыҡ әйтемдәре, халыҡ мәҡәлдәре?.. Уларҙы күҙгә элəктерһәң, һүҙгә лә, аңға ла күсә икәнен беләбеҙ бит.

**Әғләм ШӘРИПОВ.**

## Н И М Ә ? Ҡ А Й Ҙ А ? Ҡ А С А Н ?

✓2014 йылдың 1 апреленән Башҡортостанда Торлаҡ төҙөлөшөнә һаҡлыҡҡа аҡса һалыу программаһы эшләй башлағайны. Уға ярашлы, граждандар торлаҡтың бер өлөшөн түләү өсөн билдәле ваҡыт арауығында банк иҫәбенә аҡса күсерә. Махсус иҫәпкә һаҡлыҡҡа һалынған суммаға йылына 1-1,5 процент күләмендә банк проценты өҫтәлеп бара. Йыйылған аҡсаларға 30 процент күләмендә республика ҡаҙнаһынан премия күсерелә. Аҡса туплау ваҡыты тамамланғас, программала ҡатнашыусыға 4,5 йылдан алып 9 йылға тиклем льготалы кредит бирелә. Был программаны йәнә бер йылға оҙайтыу тураһында республика Хөкүмәте Бойороғо проекты әҙерләнгән.

✓Иң яҡшы уҡытыусыларҙы дәртләндереүгә Башҡортостан 2015 йылда федераль бюджеттан 7 миллион һум субсидия аласаҡ. Рәсәй Федерацияһы Президентының 2010 йылдың 28 ғинуарындағы Указына ярашлы, быйыл 1 мең уҡытыусы 200-әр мең һумлыҡ аҡсалата бүләккә аласаҡ. Федерацияның һәр субъекты өсөн аҡсалата дәртләндереүҙәр һаны 2014 йылдың декабрендә раҫланған ҡағыҙәләргә ярашлы билдәләнә. Ауыл йәки ҡала ерендә урынлашҡан мәғариф учреждениеларында уҡыусылар һаны ла иҫәпкә алына.

✓Республика комиссияһы ҡарары менән Башҡортостан Башлығының миллион һумлыҡ гранттарының бер нисәүһе әҙәбиәт өлкәһендәге проекттарға биреләсәк. Енеүселәр араһында - БР Милли әҙәби музейына һәм уның филиалдарына булышлыҡ итеү буйынса проекттар, сәсәндәр үҙәген булдырыу, әҙәби әҫәрҙәр яҙыуҙы әүҙемләштереү өсөн ике конкурс. Май аҙағында республикала грант средстволары иҫәбенә Рәсәй кимәлендә Славян яҙмаһы һәм мәҙәниәте көндәре үтә.

✓Өфөлә "Китаптар - дауаханаларға!" хәйриә акцияһы башланды. Әҙәбиәт йылы уңайынан ойошторолған акция Башҡортостандың һаулыҡ һаҡлау учреждениеларында йыл буйына барасаҡ. Былтыр апрелдә Ҡырым Республикаһының Белогорск үҙәкләштерелгән китапхана селтәре өсөн китаптар йыйыу иғлан ителгәйне. Өс ай эсендә Әхмәт-Зәки Вәлиди исемендәге китапханаға 10 мендән ашыу китап тапшырылды.

**"Башинформ"дан.**

ИШЕТТЕГЕҘМЕ ӘЛЕ?

# МИЛЕККӘ ҺАЛЫМ АРТА

**Быйылдан башлап милеккә һалымды икенсе хаҡ менән түләй башлаясағыбыҙҙы барыһы ла ишеткәндер. Был яңылыҡ күптәрҙе хәүефкә һалды. Бөгөн беҙ милеккә һалымды инвентаризация хаҡы буйынса түләйбеҙ. Ә яңы ҡанунға ярашлы, милеккә һалым кадастр хаҡы буйынса билдәләнәсәк. Ул иһә баҙар шарттарын иҫәпкә ала. Йәғни, фатирҙың хаҡы, майҙаны, уның ниндәй йортта, урамда урынлашыуы - барыһы ла иҫәпкә алына һәм ошонан сығып һалымдың күләме билдәләнә. Милектең кадастр хаҡын Рәсәйҙең күсемһеҙ милекте теркәү дәүләт хеҙмәте билдәләй.**

Рәсәй Президенты был законға ҡул ҡуйғас, халыҡ араһында төрлө имеш-мимештәр ҙә таралды. Мәҫәлән, иҫке йортта йәшәүселәргә, йәғни үткән быуаттың 60-70-се йылдарында төҙөлгән 5 ҡатлы өй хужаларына яңы ҡанун буйынса һалымды күберәк түләргә тура киләсәк, тип борсолдо күптәр. Белгестәр әйтеүенсә, был дөрөҫ түгел, милектең ҡасан төҙөлөүе һалымдың күләменә йоғонто яһамаясаҡ. Иҫке йорттарҙа йәшәүселәргә ҡурҡырға кәрәкмәй. Һалымдың күләме һалым базаһынан, йәғни кадастр хаҡынан һәм милектең майҙанынан сығып билдәләнә. Тағы бер яңылыҡ: милектең барлыҡ майҙанына ла һалым түләргә кәрәкмәй. Мәҫәлән, фатирҙың - 20, бүлмәнең - 10, йорттоң 50 квадрат метры һалымдан азат ителә.

Һалымдың ҡапыл артыуына юл ҡуймаҫ өсөн ул бер нисә этапта тормошҡа ашырыласаҡ. Цюрупа урамындағы 9 ҡатлы йорттағы 2 бүлмәле фатирҙы миҫал итеп алып, һанап ҡарайыҡ. Фатирҙың майҙаны 67 квадрат метр икән, ти. Әле фатирҙың инвентаризация хаҡы - 182 мең 620 һум, кадастр хаҡы 3 миллион 484 мең 951 һум. Былтыр уның һалымы 182 һум 62 тин ине. Ә 2020 йылдан һуң, яңыса түләй башлағас, 3 мең 484 һум 95 тин буласаҡ. Һалым яйлап артасаҡ. Шул уҡ фатир өсөн быйыл - 843 һум 9 тин, 2016 йылда - 1 мең 503 һум 55 тин, 2017 йылда - 2 мең 164 һум 2 тин, 2018 йылда - 2 мең 824 һум 48 тин һалым түләргә тейеш буласаҡбыҙ.

Яңы закон буйынса ташламалар ҙа ҡаралған. Унда бер нисә үҙгәреш бар. Элек кемдәрҙең льготаларға хоҡуғы булған, мәҫәлән, пенсионерҙар һәм башҡа категорияға ҡараған граждандар, улар һалымдан азат ителә. Тик бының өсөн уның исеменә бер генә милек теркәлгән булырға тейеш. Әгәр ҙә пенсия йәшендәге кешенең бер нисә фатиры бар икән, уларҙың ҡалғандары өсөн һалым түләргә тура киләсәк. Шулай уҡ был ҡанун баҡсаға, дачаға, гаражға ла ҡағыла. Бер нисә гаражығыҙ йәки баҡсағыҙ булһа, һалымдан береһе генә азат ителә. Тимәк, әгәр һеҙҙең бер фатирығыҙ, йортоғоҙ, баҡсағыҙ, гаражығыҙ, туҡталҡала автомобиль урынығыҙ бар икән, улар өсөн һалым түләргә кәрәкмәй.

Һыйыр аҙыраҡ ашап, күберәк һөт бирһен өсөн уны онотҡанда бер ашатып, йышыраҡ һауырға кәрәк, тигән ти берәү. Эш хаҡының түбән булыуы, торлаҡ-коммуналь түләүҙәрҙең, штрафтарҙың, һалымдарҙың арта барыуы ошо мәғәнәһеҙ шаяртыуҙы хәтерләтә кеүек.

**Заный ӘКРӘМОВ.**

ҮӘТ, ШУЛАЙ!

# РЕКЛАМАЛЫ ҠАҒЫҘҘАР...

## күҙгә сүп булып эленеп тора



**28 ғинуарҙа Өфө ҡала округы Советының сираттағы ултырышында көн тәртибенә 12 мәсьәлә сығарылып, улар буйынса ҡарарҙар ҡабул ителде. Шуларҙың иң мөһимдәренең береһе булып, моғайын да, ҡала Уставының 12 статьяһына үҙгәрештәр индереү мәсьәләһе торғандыр.**

Был процесс федераль ҡануниәткә үҙгәрештәр индерелеүгә бәйле. 2005 йылда ҡабул ителгән Устав ошо ваҡыт эсендә ун тапҡыр үҙгәртелә. Уға һуңғы төҙәтеү былтыр июндә индерелһә, РФ Дәүләт Думаһы "Рәсәй Федерацияһында урындағы үҙидаралыҡтарҙы ойоштороуҙың дөйөм принциптары тураһында"ғы законға 31 декабргә тиклем төҙәтеүҙәр индереү сәбәпле, баш ҡаланың программа документын да ҡабаттан ҡарап, уны федераль ҡануниәткә яраҡлаштырыу зарурлығы килеп тыуа. Һуңғы һәм халыҡ фекерен иҫәпкә алып тәҡдим ителгән төҙәтеүҙәрҙе Уставҡа индереүҙе депутаттар корпусы бер тауыштан хупланы.

Рекламаларҙы рөхсәтһеҙ урынлаштырған өсөн штраф күләмен арттырыу тәҡдиме, йәғни БР Дәүләт Йыйылышы-Ҡоролтайға "Башҡортостан Республикаһының административ хоҡуҡ боҙоуҙар тураһындағы Кодексына үҙгәрештәр индереү тураһында"ғы закон проекты инициативаһы менән сығыу тәҡдиме иғтибарға лайыҡлы икенсе мәсьәлә булып торҙо. Был бөгөн көнүҙәк проблема, сөнки ҡаланың имиджына туҡталыштарҙағы, бағаналарҙағы, подъезд ишектәрендәге һәм башҡа төрлө урындарға йәбештерелгән рекламалар, иғландар етди зыян килтерә. Башҡортостан Республикаһының атап үтелгән Кодексының 6.7 статьяһында бындай ғәмәл өсөн яуаплылыҡ билдәләнгән һәм былтыр уға ярашлы 1253 хоҡуҡ боҙоусы 1 миллион 220 мең һум суммаға штрафҡа тарттырылған. Әммә штрафтарҙың күләме бәләкәй булыуы (граждандар өсөн - 300-500, вазифалы кешеләр өсөн - 1000-2000, ойошмалар һәм предприятиелар өсөн 5000-8000 һум) тәртип боҙоусыларҙың эшмәкәрлеген туҡтата алмай. Күрше субъекттарҙың тәжрибәһен өйрәнеп, депутаттар штраф күләме ҙур булған төбәктәрҙә рөхсәтһеҙ реклама урынаштырыу осраҡтарының кәмеүен асыҡлай һәм бындай тәжрибәне үҙ ерлегебеҙҙә ҡулланырға ҡарар итә. Шулай ҙа күп фатирлы йорттарҙа һәм йорт ихатаһы территорияларында иғландар йәбештергән өсөн штраф күләме шул килеш ҡала, әгәр ҙә тәртип боҙоусы икенсе тапҡыр ошо шөғөл менән тотолһа, граждандар өсөн штраф күләме 500 һумдан 1500 һумғаса күтәрелеүе ихтимал (вазифалы кешеләр өсөн - 2000-5000 һум, ойошма-предприятиелар өсөн 8000-15000 һум). Ауыл-ҡасаба сиктәрендә рөхсәтһеҙ реклама таратыу граждандар өсөн 500-1500 һум буласаҡ тип ҡаралһа, вазифалы кешеләр өсөн - 5000-8000, ойошма-предприятиелар өсөн 15000-30000 һум. Хоҡуҡ боҙоу ҡабатланған осраҡта штраф күләме граждандарға 1500 - 3000, вазифалы кешеләргә - 8000-15000, ойошма-предприятиеларға 30000-50000 һумғаса артасаҡ. Әгәр был инициативаны БР Дәүләт Йыйылышы -Ҡоролтай депутаттары ла хуплаһа, штраф санкциялары баш ҡалала ғына түгел, тотош республикала ғәмәлдә буласаҡ.

Ревизия комиссияһы контроль-иҫәп органы рәйесе Олия Порсева 2014 йылда бюджет аҡсаһының нисек тотонолоуына отчет яһаны. Былтыр был орган 107 объектта 28 тикшереү һәм эксперт-аналитика сараһы үткәргән. Башта 12 тикшереү планлаштырылыуға ҡарамаҫтан, комиссия прокуратура ҡушыуы буйынса - 8, халыҡтың ялыуы буйынса 6 тикшереү уҙғара, ҡала Советы депутаттары төркөмө менән берлектә мәктәптәрҙә туҡланыу ойоштороу һәм "Тиҙ медицина ярҙамы станцияһы" һаулыҡ һаҡлау учреждениеһының средстволарҙы тотоноуын тикшерә. 2013 йыл менән сағыштырғанда тикшереүҙәр күләме генә түгел, асыҡланған етешһеҙлектәрҙең артыуы күҙәтелә.

Шулай уҡ Ревкомиссия муниципаль программаларҙың үтәлешен дә күҙ уңынан ысҡындырмай. Был эшмәкәрлек уларҙың күләмен арттырмау һәм финанс менән тәьмин ителмәгән муниципаль бурыс суммаһын торгҡа сығармау маҡсатынан ваҡытында төҙәтеүҙәр индерергә мөмкинлек бирә.

Ғөмүмән, тикшереүҙәр 648 миллион һумлыҡ етешһеҙлек таба. Улар, нигеҙҙә, конкурс торгтарын үткәреүгә һәм муниципаль милекте иҫәпкә алыуға бәйле. Шулай уҡ бюджет учреждениеларында һәм муниципаль предприятиеларҙа эш хаҡын күтәреү, бюджет аҡсаһын нигеҙһеҙ туҙҙырыу, ремонт эштәренең күләмен арттырып күрһәтеү факттары ла асыҡланған. Был суммалар ошоға юл ҡуйған ойошма-предприятиелар тарафынан ҡала бюджетына кире ҡайтарыла. Олия Вәли ҡыҙы белдереүенсә, тикшереү һөҙөмтәләре буйынса 18 кеше дисциплинар яуаплылыҡҡа тарттырылған.

Шулай уҡ депутаттар 2015 йылдың беренсе кварталына эш планын да раҫланы. Ул үҙ эсенә 80 сараны ала. Бөйөк Еңеүҙең 70 йыллығын лайыҡлы ҡаршылау буйынса саралар бында башҡа мәсьәләләр менән бер рәттән лайыҡлы урын алып тора. Беренсе кварталда ҡала Советы депутаттары БР Дәүләт Йыйылышы - Ҡоролтайға өс закон проекты инициативаһы менән сығырға ниәтләй. Беренсеһе - административ хоҡуҡ боҙоуҙарға бәйле булһа, икенсеһе - "Йорт хайуандары тураһында" БР законына муниципалитеттарға хужаһыҙ хайуандарҙы аулау хоҡуғын биреү тураһында өҫтәмә, өсөнсөһө республика парламенты аша Рәсәй Федерацияһының Урман кодексының 105-се статьяһына үҙгәрештәр индереү буйынса. Әгәр Кодексҡа үҙгәрештәр индерелһә, ҡала округы территорияһында урынлашҡан урмандар аша инженер селтәрҙәре үткәреү һәм юлдар һалыу мәсьәләһе хәл ителәсәк. Был мәсьәлә бөгөн Өфө генә түгел, башҡа эре ҡалалар өсөн дә актуаль булып тора.

**Зәйтүнә ӘЙЛЕ.**

## Б А Ш Ҡ А Л А Х Ә Б Ә Р Ҙ Ә Р Е

✓БР Сауҙа һәм Ҡулланыусылар хоҡуҡтарын яҡлау буйынса дәүләт комитетында Башҡортостан менән Үзбәкстан араһында тауар алмашыуҙы ойоштороу буйынса осрашыу уҙҙы. Осрашыу барышында Үзбәкстандан емеш-еләктәр һәм туҡыма әйберҙәр килтереү тураһында һөйләшелде. Башҡортостан үҙ сиратында уларҙы сәнәғәт тауарҙары менән тәьмин итергә ниәтләй. Яҡын арала республиканың эшҡыуарлыҡ берләшмәләре вәкилдәре эшлекле бәйләнештәр булдырыу өсөн Үзбәкстанға юлланасаҡ.

✓Рәсәй Федерацияһы субъекттары араһында ауыл хужалығына ярҙам итеүгә дөйөм 36,3 миллиард һум күләмендә субсидиялар бүлеү тәртибе РФ Хөкүмәте бойороғо менән раҫланған. Башҡортостан ауыл хужалығы етештереүселәренең малсылыҡты үҫтереүгә ҡыҫҡа сроклы кредиттары буйынса процент ставкаларының бер өлөшөн ҡаплауға - 244,3 миллион һум, үҫемлекселекте үҫтереүгә ҡыҫҡа сроклы кредиттары буйынса 199,5 миллион һум, бәләкәй хужалыҡ формаларының оҙаҡ, урта һәм ҡыҫҡа сроклы кредиттарына 104 миллион, сәсеүлектәрҙе страховкалау буйынса сығымдарының бер өлөшөн ҡаплауға - 120,2 миллион һум, малсылыҡ өлкәһендә страховкалау буйынса 1,2 миллион аласаҡ.

✓Өфөлә декабрь айында торлаҡтың бер квадрат метрының уртаса хаҡы 63,8 мең һум тәшкил итте, был ноябргә ҡарата 1,4 процентҡа күберәк. Санкт-Петербургта (плюс 1,8 процент), Һамарҙа һәм Рязандә (плюс 1,5 процент) хаҡтар Өфөгә ҡарағанда тиҙерәк артты. Хаҡтар мониторингына 22 ҙур ҡала һәм Мәскәү өлкәһе инде.

✓"Өфөнөң йыйылма командаһы" март айында Александр Масляковтың Премьер-лигаһында сығыш яһаясаҡ. Команда Сочиҙа үткән XXVI "КиВиН-2015" фестивале йомғаҡтары буйынса рәсми саҡырыу алды. "Өфөнөң йыйылма командаһы"на өс йыл. Етәксеһе Тимур Шәйхетдинов һүҙҙәренсә, 26 йыл эсендә беренсе тапҡыр федераль телеканалда Башҡортостандан КВН командаһы сығыш яһаясаҡ. Сочиҙа сығыш яһаған "Әҙәбиәтселәр клубы" командаһы ла яҡшы һөҙөмтә күрһәтте - ул Беренсе лигаға үтте.

✓Словакиялағы XXVII Бөтә донъя ҡышҡы Универсиадаһында саңғы менән трамплиндан һикереү буйынса ярыштар үтте. К-90 трамплинында Рәсәй йыйылма командаһы составында сығыш яһаусы Башҡортостан спортсыһы Ильмир Хазетдинов көмөш призер булды.

✓ *Үҙе табип булараҡ, Сәлиә Шәрифйән ҡыҙы был өлкәләге кадрҙар мәсьәләһенә лә битараф түгел. Йыл һайын ул Өфө гимназияларында медицина юлын һайларға теләгән уҡыусылар менән осрашыуҙар уҙғара.*



*АФАРИН!*

**РФ Дәүләт Думаһы депутаты, "Мираҫ" фонды етәксеһе Сәлиә Шәрифйән ҡыҙы Мырҙабаева халҡыбыҙҙың рухи һәм мәҙәни ҡомартҡыһын һаҡлап ҡалыуға йүнәлтелгән хәйриәлек эштәре менән республикала киң билдәле. Бөгөнгө көндә ул Бөтөн донъя башҡорттары ҡоролтайы Башҡарма комитеты ҡарамағындағы "Ағинәй" йәмәғәт ойошмаһы эшмәкәрлегенә үҙ өлөшөн индерә, БСТ каналының туған телгә, тарихҡа арналған проекттарын тормошҡа ашырыуға ярҙам итә. Шулай уҡ депутат йәш быуындың проблемалаларына ла битараф түгел - бына бер нисә йыл инде ул Мәскәү һәм Санкт-Петербург ҡалаларында белем алған Башҡортостан студенттары һәм аспиранттары ассоциацияһы менән тығыҙ бәйләнештә тора.**



# МӘСКӘҮҘӘГЕ СТУДЕНТТАРҘЫ...

## депутат үҙе хәстәрләй

Ассоциация 2009 йылда Рәсәйҙең төрлө юғары уҡыу йорттарында белем алған алдынғы ҡарашлы Башҡортостан йәштәре тарафынан булдырылды. Бөгөнгө көндә ул 2 меңдән ашыу студент һәм аспиранты берләштерә. Ойошма абитуриенттарға Мәскәү һәм Санкт-Петербург ҡалалары университеттарына уҡырға инергә ярҙам итә, республиканың юғары класс уҡыусылары менән һөнәри йүнәлеш буйынса эш алып бара, бынан тыш, Мәскәүҙә башҡорт йәштәре өсөн төрлө саралар уҙғара - уларға мегаполис шарттарында юғалып ҡалмау һәм үҙ урынын табыу өсөн был сараларҙың әһәмиәте баһалап бөткөһөҙ.

Былтыр Сәлиә Шәрифйән ҡыҙы профориентацион эшкә лә әүҙем ҡушылды һәм уны ысын мәғәнәһендә яңы кимәлгә күтәрҙе. Депутат билдәләүенсә, төбәк кимәлендә был йүнәлеш бик һүлпән ойошторолған. Хәҙерге заманда абитуриенттарҙы яңы мөмкинлектәр менән таныштырыу, уларҙың хоҡуҡтары тураһында бәйән итеү, ҙур ҡалаларҙа белем алыу тураһында ҡайһы бер ҡалыплашҡан ҡараштарҙы үҙгәртеү бик мөһим, тип һанай парламент ағзаһы. Ошо маҡсат менән былтыр апрель айында көньяҡ-көнсығыш райондары абитуриенттары өсөн Сибай ҡалаһында Ассоциация менән берлектә ҙур осрашыу үткәрелде. Унда Мәскәү, Санкт-Петербург һәм Өфө ҡалаларының 15 университетынан вәкил, 8 райондан 1200-ҙән ашыу сығарылыш уҡыусыһы ҡатнашты. Ошондай уҡ сара быйыл 13-14 февралдә Сибай институты базаһында тағы ла ойоштороласаҡ, тип көтөлә.

Үҙе табип булараҡ, Сәлиә Шәрифйән ҡыҙы был өлкәләге кадрҙар мәсьәләһенә лә битараф түгел. Йыл һайын ул Өфө гимназияларында медицина юлын һайларға теләгән уҡыусылар менән осрашыуҙар уҙғара. Унда депутат һөнәри үҙенсәлектәр тураһында һүҙ алып бара, Рәсәйҙең был йүнәлештәге вуздары менән яҡындан таныштыра. Бынан тыш, ул Мәскәү һәм Санкт-Петербург медицина университеттарына юллама бүлеүҙе хәстәрләүгә лә әүҙем ҡушылды. Уның ярҙамында былтыр 15 абитуриент был йүнәлештәге иң яҡшы юғары уҡыу йорттарына уҡырға инде.

Сәлиә Шәрифйән ҡыҙы мегаполистарҙағы студенттар менән даими аралашыуҙы ла күптән яйға һалған: улар өсөн йыл әйләнәһенә Мәскәүҙә - Дәүләт Думаһына, төньяҡ баш ҡалала - Таврида һарайына экскурсиялар һәм илебеҙҙең билдәле шәхестәре менән осрашыуҙар ойошторола. Мәҫәлән, яңыраҡ башҡорт йәштәре бар донъяға танылған шахматсы Анатолий Карпов һәм беренсе космонавт ҡатын-ҡыҙ Валентина Терешкова менән аралашыу бәхетенә өлгәште. Былтыр яҙ иһә улар республиканың Дәүләт Думаһындағы башҡа депутаттар менән осрашып, көнүҙәк проблемалар тураһында фекер алышты, ҡыҙыҡһындырған һорауҙарына яуаптар алды. Ошондай һәр осрашыуҙан һуң студенттарға баш ҡала театрҙарына билеттар бүләк итеү күптән матур йолаға әүерелгән. Бөгөнгө көндә йәштәр билдәле Ҙур театрҙың, Горький исемендәге Мәскәү сәнғәт академик театрының, Станиславский һәм Немирович-Данченко исемендәге музыкаль театрҙың даими тамашасылары.

Иң һәләтле, аҡыллы һәм әүҙем йәштәребеҙ ҙә депутаттың иғтибарынан ситтә ҡалмай. Яңы уҡыу йылы башында Мәскәү һәм Санкт-Петербург ҡалаларында белем алған республика студенттары араһында Сәлиә Шәрифйән ҡыҙы етәкләгән "Мираҫ" хәйриә фонды премияһын алыуға асыҡ конкурс уҙғарылды. Башҡортостандың кадрҙар мөмкинлеген баһалау һәм үҫеп килгән быуында интеллектуаль һәм ижади әүҙемлекте дәртләндереү сараның маҡсаты итеп билдәләнде. Конкурс һөҙөмтәләре буйынса фән, сәнғәт, спорт һәм йәмәғәт эшмәкәрлеге өлкәһендә иң-индәр билдәләнде. Еңеүселәрҙе тантаналы бүләкләү сараһы март айына планлаштырылған.

Яңы йыл алдынан "Байыҡ" телевизион конкурсында 3-сө урын яулаусы "Алтын Ай" Мәскәү башҡорт бейеү ансамбленең уңышына ла Сәлиә Шәрифйән ҡыҙы үҙ өлөшөн индерҙе - коллегаһы, депутат Рафаэль Мәрҙәншин менән берлектә бейеүселәрҙең баш ҡаланан Өфөгә тиклем юл сығымын ҡапланы.

Ассоциация тарафынан уҙғарылған сараларҙа иһә парламентарий ағзаһы - көтөп алынған ҡунаҡ. Декабрь айында уҙғарылған "Мәскәү һылыуҡайы" конкурсында ул жюри ағзаһы булды, ҡыҙҙарға махсус приздар тапшырҙы. "Сәлиә Шәрифйән ҡыҙы - Ассоциацияның иң әүҙем ағзаһы", тип шаярта егеттәр-ҡыҙҙар. "Мәскәүҙә ул беҙгә әсәй кеүек", тип тә өҫтәйҙәр.

**ШУЛАЙ ИТЕП...**

**Йәштәрҙең шәхес булараҡ формалашҡан осоронда өлгө алыр, ауыр саҡта кәңәш бирер кешеһе булыу мөһимлеге барыбыҙға ла мәғлүм. Юҡҡа ғына "Ояһында ни күрһә, осҡанында шуны эшләр", тимәгәндәр бит. Башҡортостандан ситтә белем алған студенттар, халҡым, республикам, тип йән атҡан көслө рухлы остаз, ысын шәхес, тыуған еренең тоғро ҡыҙы Сәлиә Шәрифйән ҡыҙы Мырҙабаева йөҙөндә тап шундай кешене тапты ла инде.**

**Фәйгөл ЮНЫСОВА.**

*ҺОРАУ - ЯУАП*

## ЯҢЫ ҠАҒИҘӘЛӘР

**Банктан кредит алыу хәҙер яңы ҡағиҙәләр буйынса башҡарыла, тип ишеткәйнем. Шул хаҡта тулыраҡ мәғлүмәт бирһәгеҙ ине.**

- 2014 йылдың 1 июленән ҡулланыусылар кредиты менән файҙаланыу ҡағиҙәләре үҙгәрҙе. Уға ярашлы, кредит алыусы, кәрәк тип тапһа, унан баш тартырға мөмкин. Шулай итеп, маҡсатҡа ярашһыҙ алынған кредитты - ике аҙна, ә маҡсатлы кредит алған осраҡта бер ай эсендә банкка кире ҡайтарып була. Был осраҡта кредит менән күпме ваҡыт ҡулланылған (бер көнмө, бер аҙнамы һ.б.), шул осор өсөн генә процент түләнә. Элек иһә процент тулы ай өсөн түләнә ине.

Шул уҡ ваҡытта банктар хәҙер кредитты ваҡытынан алда ябыуҙы талап итеү хоҡуғына эйә. Әгәр ҙә кредит 60 көндән әҙ ваҡытҡа бирелеп, кредит алыусы түләүҙе 10, ә 60 көндән күберәк ваҡытҡа бирелеп, түләүҙе 60 көндән артыҡҡа һуҙлатһа, банк тиҙ арала кредитты тулыһынса ябыуҙы талап итеү хоҡуғына эйә.

Яңы ҡағиҙәгә ярашлы, банк кредит алыусыға ай һайын уның бурысының күләме хаҡында мәғлүмәт еткереп торорға бурыслы. Шулай уҡ клиент кредитты үҙгәреп тороусы валютала алырға теләһә, банк мөмкин буласаҡ хәүефтәр тураһында аңлатырға тейеш.

Договор формаһы ла үҙгәрҙе. РФ "Ҡулланыусылар кредиты тураһында"ғы Законды 11-се статьяһына ярашлы, банк кредиттың тулы хаҡын килешеүҙең тәүге битендә өҫкө уң яғында асыҡ итеп яҙып ҡуйырға бурыслы.

Проценттар хаҡында ла банк тулы мәғлүмәт бирергә тейеш. Кредит алыусыға аңлайышлы һәм асыҡ процент ставкаһы буйынса аҡса бирелә. Ә элекке кеүек, йәшерен һәм банк клиенты аңламаған проценттар булмаясаҡ.

Яңы закон кредит буйынса максималь ставканы ла сикләй. Кредит биреүселәр ай һайын Үҙәк банк тарафынан билдәләнгән уртаса ставканан сығып эш итәсәк. Шулай уҡ кредит түләүҙе һуҙлатҡан өсөн ҡаралған пеня күләме лә үҙгәрҙе.

Бурыс хаҡында иҫкәртеүселәр ҙә яңы законға ярашлы эш итергә бурыслы хәҙер. Улар эш көнөндә иртәнге сәғәт 8-ҙән киске 10-ға, ә ял көндәрендә иртәнге 10-дан киске 8-гә тиклем генә шылтыратырға мөмкин. Шулай уҡ элек ҡулланылған "коллектор" һүҙе хәҙер "өсөнсө кеше" тип үҙгәртелде.

## ИГЕҘӘКТӘРГӘ ПОСОБИЕ

**Беҙҙең игеҙәк балалар тыуҙы. Уларға бала тыуыу буйынса бер тапҡыр бирелә торған матди ярҙам алыу ниәтенән эш урынына мөрәжәғәт иткәс, бухгалтер, законға һылтанып, бер балаға ғына пособие түләйәсәге хаҡында белдерҙе. Ләкин апайым, ике балаға ла түләргә тейештәр, ти. Уларҙың кеме хаҡлы?**

- 1995 йылдың 19 майында ҡабул ителгән "Балалары булған граждандарға дәүләт ярҙам тураһында"ғы Федераль законға ярашлы, игеҙәк балалар тыуған осраҡта уларҙың икеһенә лә бер тапҡыр бирелә торған матди ярҙам түләнә (ярашлы рәүештә, өс игеҙәк тыуһа - өс пособие һәм артабан). Шуға күрә эш урынында ике бала өсөн дә документтарҙы алырға һәм тейешле матди ярҙамды иҫәбегеҙгә күсерергә бурыслылар. Әгәр ҙә документтарҙы ҡабул итеүҙән баш тартһалар, ойошма директоры исеменә яҙма рәүештә ялыу яҙығыҙ. Инде был ысул да ярҙам итмәһә, прокуратураға мөрәжәғәт итегеҙ. Закон тулыһынса һеҙҙең яҡта.

## Х А Л Ы Ҡ Д А У А Һ Ы



**Был рубрикала баҫылған кәңәштәрҙе ҡулланыр алдынан мотлаҡ табип менән һөйләшергә, аныҡ диагноз ҡуйырға, үләндәргә аллергия юҡлығын тикшерергә кәрәклекте онотмағыҙ.**

### Аҡ шыршы

❖ Яңы йыл байрамына ҡуйылған аҡ шыршыны аҙаҡтан ташлауы бик йәл булһа, иң ябайы - унан миндек бәйләү. Уның ботаҡтарында һәм энәләрендә эфир майҙары күп. Сабынған саҡта улар миндектән тирегә әләгә һәм йылытыусы бальзам һымаҡ тәьҫир итә. Аҡ шыршының ылыҫында булған ыҫмала кеүек матдәләр тирҙе ҡыуа, мускулдарҙа ҡан әйләнешен яҡшырта, антисептик сифаттарға эйә. Аҡ шыршы майы тире ауырыуҙары менән бер рәттән, һалҡын тейгәндә, йүткергәндә, бронхит ваҡытында тын юлдарына файҙалы. Киҙеү эпидемияһы ваҡытында аҡ шыршы миндеге менән сабыныу яҡшы һөҙөмтә бирә.

❖ Аҡ шыршы миндеге стресты, хәүеф тойғоһон баҫа, мускулдарҙы көсөргәнештән ҡотҡара, тынысландыра, дөйөм тонусты, кәйефте күтәрә.

❖ Миндеккә тип аҡ шыршыны алдан өҙөп, киптереп әҙерләп булмай, сөнки ул ныҡ кибә һәм файҙаланыуға яраҡһыҙға әйләнә. Яңы әҙерләнгән миндекте оҙаҡ итеп һыуға һалып ебетеү кәрәкмәй, ҡайнар һыуҙа сайҡап алыу ҙа етә.

❖ Асыҡ яралар, йәрәхәттәр, ҡан тамырҙары менән бәйле ауырыуҙар булғанда аҡ шыршы миндеген ҡулланырға ярамай. Уның шулай уҡ аллергияға килтереүе ихтимал. Ауырлы ҡатындарға шулай уҡ миндек менән сабыныуҙан тыйылырға кәңәш ителә.

### Аҡ шыршы майы

❖ Халыҡ медицинаһында аҡ шыршы майы ла ҡулланыла. Ангина ваҡытында миндалиналарға мамыҡ тампон ярҙамында аҡ шыршы майы һөртөргә. 4-6 сәғәттән һуң тағы ҡабатларға. Дауаны көнөнә 2-5 тапҡыр эшләргә. Хроник ангина мәлендә быға өҫтәп, танауға 1-2 тамсы май тамыҙырға.

❖ Үпкә көпшәләре шешкәндә эмаль һауытта һыу ҡайнатып, уға 3-4 тамсы май тамыҙырға һәм ошо быуҙы һуларға. Ингаляциянан һуң түште май менән ыуалар һәм юрған ябынып ятып торалар.

❖ Киҙеү, ОРЗ, һалҡын тейгәндә арҡаға, түшкә, муйынға май менән массаж эшләйҙәр. 5-6 сәғәттән һуң тағы ҡабатлайҙар. Массаждан һуң ауырыуға тир ҡыуыусы үләндәрҙән яһалған сәй эсереп, урап һалалар.

**Айбикә ЯҠУПОВА.**

**✓ Тыуған илдә бысраҡ подъезд ғына күреп үҫмәһен балаларыбыҙ. Ҡала балаларына ла ойоштороп була бындай байрамдарҙы. Беҙ бер ваҡыт күрше-тирәлә йәшәүсе Өфө башҡорттары менән башҡортса Яңы йыл үткәрә башлағайныҡ.**



ЙОЛАЛАРЫБЫҘ



# ХАЙУАНДАРҘЫҢ ҠЕҮӘТЕ...

## Хоҙайҙың ҡөҙрәте

**Фольклорҙа, халыҡ араһында йөрөгән төрлө лаҡаптарҙа айыуҙың ҡатын-ҡыҙҙы урлап, үҙе менән бергә йәшәтеүе тураһында мәғлүмәттәр ҙә осрай. Был күренеш сыуаш, ҡаҙаҡ, хакас, шор, эстон, удмурт, шулай уҡ швед, немец, урыҫ, украин, чечен халыҡ легендаларында ла бар. Лингвистик материалдарҙа күп кенә халыҡтар, шул иҫәптән, башҡорттар ҙа айыуҙы "олатай" тип йөрөтә.**

Боронғо төрки телендә, хакастарҙа, бүрәттәрҙә, монголдарҙа "айыу" менән "атай" һүҙҙәре бер мәғәнәне белдерә. Шулай уҡ "инә айыу" менән "әсәй" һүҙҙәре өсөн дә бер термин ҡулланылған телдәр бар. Башҡорт телендә "баба", "бабай", "апа", "абзый" (оло ағай), "абышҡа" (тол ир), "абыҙ" (ғилемле кеше) кеүек туғанлыҡ терминдары киң таралған. Белгестәр фекеренсә, "апа" нигеҙле туғанлыҡ терминдары ҡайһы бер телдәрҙә "карт", "олатай", "атай" тигәнде аңлата. Шул уҡ ваҡытта, боронғо төрки телендәге, алтай, хакас, тыва, шор телдәрендәге "аба", алтай һәм шор телендәге "абаай", "абагай", "абышка", "апшыйак", монгол һәм бүрәт телдәрендәге "баавгай", "баабгай" һүҙҙәре "айыу"ҙы белдерә. Башҡорттарҙағы ҡатын-ҡыҙ туғандарҙы атап йөрөтөүсе терминдар - "апа", "апай", "апый" (диал.), "апһын" (ир туғандарҙың ҡатындары бер-береһенә ҡарата), "абыстай" (уҡымышлы ҡатын), уларҙың йомшаҡ варианттары "әбей", "әпсәй" (диал.) шулай уҡ "айыу" тигән төшөнсәне бирә. Быларҙың барыһында ла, ҡасандыр кеше ҡайһы бер йәнлектәр менән туғандаш булған, тигән ышаныу ята. Балаларҙы яуыз көстәрҙән һаҡлау маҡсатында Айыухан, Айыусы, Айыуҡай, Айыуҡас, Айыубай, Айыуҡара тигән исемдәр ҡушылған. Ҡайһы бер халыҡтарҙы ғаиләлә тыуған бер бала үлеп торғанда яңы тыуған сабыйҙы айыу тиреһенә урайҙар һәм уны айыу балаһы тип йөрөтәләр.

XIX быуаттың аҙағы - XX быуаттың башында Учалы, Әбйәлил райондарында, Пермь крайында, Силәбе өлкәһендә "Айыу туйы" тип йөрөтөлгән йола байрамы киң таралған булған. Сығанаҡтар буйынса, ул бер-береһенә оҡшамаған ике вариантта үткәрелгән. Әбйәлил районында яҙып алынған мәғлүмәт буйынса, һунарсылар айыуҙы үлтереп, уны йәйләүгә алып килә һәм башы, аяҡтары, ҡойроғо менән бергә уның тиреһен һыҙырып алалар. Һуңынан тиреһен эсенә үлән тултырып, уны майҙандың уртаһына ҡуялар. Байрам 15 көн бара. Һунарсылар айырым да, бергәләп тә айыу һыны әргәһендә бейеүҙәр башҡара, улар йыр һәм һөрәнләүҙәр менән оҙатыла. Бейеүсе айыу тиреһенән тегелгән тунды әйләндереп кейә һәм айыу булып алпан-толпан атлап йөрөй. Байрамда түбәндәге арбау башҡарыла:

*Килләлер Алып*
*Ҡолаҡтарын һалып,*
*Алпан-толпан атлаған,*
*Уҫаллығын ташлаған,*
*Хайуандарҙың ҡеүәте,*
*Бер Хоҙайҙың ҡөҙрәте.*

**Ф. Илембәтов, А. Илембәтова.**
**"Башҡорт мифтары һәм йолаларында хайуандар культы" китабынан.**
**(Дауамы бар).**

ӘЙҘӘГЕҘ...

# ҺЫРҒАЛАҠ БАЙРАМЫ ОЙОШТОРОП,

## бала күңеленә тойғо һалайыҡ!



**Быйыл ҡышҡы каникулдар башланғас та ауылда Һырғалаҡ байрамы үткәрҙек. Балаларға бик күңелле булды. Ә бит был байрамды йылына ике тапҡыр: яңы йыл башланғас - Һырғалаҡты асыу һәм яҙғы каникулдар башланғас -Һырғалаҡ менән хушлашыу байрамы итеп үткәреп була. Ауыл ерҙәрендә балалар өсөн күмәкләп күңел асыу сараһын мөмкин тиклем күберәк үткәрергә кәрәк. Бындай саралар уларҙы яҡынайта, берләштерә, иҫтә ҡалырлыҡ мәлдәр күберәк була. Билдәле, ғүмер - ул йәшәлгән йылдар түгел, иҫтә ҡалған мәлдәрҙән хасил.**

Беҙ бәләкәй саҡтарҙа, яҙ башланыу менән, өй нигеҙенә сығып, сынаяҡ ватыҡтары йыйып алып, "өй" уйнай торғайныҡ. Бер-беребеҙгә ҡунаҡҡа йөрөшәбеҙ, әсәйҙәребеҙ кеүек һөйләшәбеҙ, ҡүстәнәс биреп ҡайтарабыҙ, бер-беребеҙҙән һауыт-һаба алып торабыҙ... Әле өлкәнәйеп бөткәс, шул әхирәттәрҙе осратһам, иң элек ҡояштың тәүге йылы нурҙары менән бергә өй нигеҙенә йыйылышҡан шул саҡтар күҙ алдына килә һәм әллә ҡасан булып үткән уйындарҙан күңелгә йылылыҡ бөркөлә, бала саҡтағы әхирәт уғата яҡыныраҡ булып китә. Ғүмерем дә үткәндәргә ҡайтыу иҫәбенә оҙайып киткәндәй тойола.

***Уйға һалған ваҡиға.*** *Байтаҡ башҡорт егеттәре һәм ҡыҙҙарын сит илдәргә уҡырға ебәргәйнеләр. Шуларҙың береһе - танышымдың ҡыҙы Англияла кейәүгә сығып тороп ҡалды. Әсәһе янына ҡайтҡан сағында: "Өфөнө һағынмаҫһыңмы?" - тип һорайым. "Ә мин бында нимә күреп үҫтем? Бысраҡ подъезымды һағынайыммы?" - тип яуап бирҙе ул һорауға һорау менән. Үҙем биргән һорауыма яуапты үҙем уҡ эҙләргә тейеш булып ҡалдым.*

Дөрөҫ, көндәлек мәшәҡәттәр менән генә йәшәһәк, бала күңеленә йылылыҡ һалырлыҡ, һағынып иҫкә алырлыҡ бер ни ҙә эшләй алмабыҙ. Ә аҙаҡ инде бала үҫеп етеп, ете ят менән сәсен бәйләп, сит илдәрҙә тороп ҡалыр ҙа, өлкәнәйә башлағас, бауыр баҫыр, эс серҙәрен һөйләр яҡынын таба алмай ҡаңғыра башлаған сағында әсәһенә үпкәләр. Мотлаҡ үпкәләр.

Унайы килгәндә, бер ваҡиғаны һөйләп китеү бик тә урынлы булыр. Сит илдә кейәүгә сығып, ҡартлығын шунда ҡаршыларға мәжбүр булған бер әсәнең һөйләгәне: "Ирем, йәғни баламдың атаһы ят милләт булғас, балам мине әсәй тип яҡын тойманы, сөнки мин булмышым менән уларға тап килмәйем. Сабый сағында әсәй яҡынлығы бар ине, үҫә килә ул үтте. Ә милли яҡынлыҡ юҡ. Ирем үлгәс, береһе менән дә бер ниндәй ҙә уртаҡлыҡ ҡалманы, балалар ят бауыр кеүек. Тыуған илемдә лә торламайым. Барыһы ла ятҡа әйләнгән. "Сит ерҙәрҙә күп йөрөһән, үҙ туғаның ят була", тигән йыр юктан сыҡмағандыр. Йәш саҡта, әлбиттә, бөтәнөһө лә ҡыҙыҡ һымаҡ ине. Йәшәй-йәшәй бер ҡыҙығы ла ҡалманы. Тиҙ генә күңелгә тейеп бүктерә торған тәм-том һымаҡ сит илдең рәхәтлеге лә, матурлығы ла... Ә тыуған илең көнөнә бер нисә тапҡыр ашаған икмәк кеүек татлы бит ул... Йәш саҡта үйланылмаған. Ә әсәйем аңлатмаған. Үҙе лә аңламағандыр инде..."

Бына шулай тип үкенес белдергәйне йәш сағында сит ил кешеһенә кейәүгә сығыуҙы айға осҡандай ҡаҙаныш һымаҡ күргән ҡатын... Ошонан да сығып әйтәм: балаларыбыҙ, ейәндәрбеҙ күңеленә йылылыҡ бөркөләр ваҡиғаларҙы мөмкин тиклем күберәк булдырыу яғын хәстәрләйек, әсәйҙәр, өләсәйҙәр. Хәҙер сит ил ҡапҡалары шар асыҡ, ымһындырғыс нәмәләр бихисап...

Һырғалаҡ байрамында һәр береһе өйҙән ҡүстәнәс тотоп килеп, урамда самауыр ҡайнатып сәй эсеү, һырғалаҡ әйләү, ҡар өҫтөндә милли көрәш, арҡан тартыш, сана егелгән аттарҙа йөрөү, ҡүмәк бейеү ойоштороу - бер ниндәй сығым да, тау аҡтарыр көс тә талап итмәй. Бары үҫеп килгән бала күңелендә тыуған яҡтарға, бала сағына, ауылдаштарына ҡарата һөйөү, йән йылыһы тойғоһо һалыуҙы маҡсат итеп ҡуйыу кәрәк. "Бысраҡ подъездан башҡа нимә күрҙем!" - тип торған баланың салғыйына йәбешеп кенә илдә алып ҡалып булмай. Тыуған илдә бысраҡ подъезд ғына күреп үҫмәһен балаларыбыҙ. Ҡала балаларына ла ойоштороп була бындай байрамдарҙы. Беҙ бер ваҡыт күрше-тирәлә йәшәүсе Өфө башҡорттары менән (Батыр урамындағылар) башҡортса Яңы йыл үткәрә башлағайныҡ. Башҡорттар ғына түгел, ул тирәлә йәшәүсе бөтәнөһө лә ҡушылып китә торғайны. Ул ваҡытта беҙҙең бәләкәй генә тойолған балаларыбыҙ бөгөн ир етеп, үҙҙәре ғаилә ҡорған. Осрашырға тура килһә, рәхмәт әйтеп китәләр...

**Мәрйәм БУРАҠАЕВА.**

ҺАБАҠТАР

# ЭЛЕККЕ УҠЫТЫУСЫ БУЛАМЫ?



**Бөтәбеҙҙең дә уҡытыусыһы бар... Кем булып эшләүеңә, нисә йәштә булыуыңа ҡарамаҫтан... Барыбер һине беренсе хәреф танырға, һанарға, уҡырға өйрәткән уҡытыусың бар...**

Әлбиттә, уҡытыусыларҙың да төрлөһө була. Ҡайһылары үҙ эшен яратып һайлаған, бар ғүмере буйы янып-яныып, бар күңелен һалып эшләй.Һинең бәләкәй генә уңыштарыңа ҡыуана, уңышһыҙлыҡтарыңды үҙенеке кеүек ҡабул итә... Бәлки, маҡтаулы исеме, юғары дәрәжә-даны ла юҡтыр, әммә Уны уҡыусылары ярата! Бынан да юғарыраҡ титулдың булыуы мөмкинме? Юҡтыр... Ә ҡайһы бер уҡытыусы эшкә гәҙәт буйынса ғына, аҡса табыр, ғаиләһен ҡарар өсөн генә йөрөй. Бәлки, төрлө юлдар менән алған атҡаҙанған тигән исеме лә барҙыр, әммә...

Уҡытыусының элеккеһе-хәҙергеһе, хаҡлы ялдағыһы буламы икән? Юҡтыр, моғайын... Уҡытыусы, әгәр ул ысын Уҡытыусы булһа, ниндәй генә эшкә күсһә лә, хаҡлы ялға сыҡһа ла, үҙенең асылына тоғро ҡала. Асылы ниндәй була бит әле...

"Ошо эшем арҡаһында алдаҡсы тигән даным таралды халыҡ араһында", тигәйне элек уҡытыусы булып эшләп, түрәгә урынға күсеп ултырға берәү. Мин аптырап киттем: "Ни эшләп улай тип әйтәһегеҙ?" "Кул аҫтындағыларға бер төрлө вәғәҙә бирергә тура килә, эш бармаһа, юғарылағыларға икенсе төрлө аңлатырға мәжбүрмен... Ысынлап та, был урында эшләгәс, алдамайынса булмай икән..." - тине элекке уҡытыусы...

Мин дә мәктәптә 20 йыллап эшләгәс, икенсе эшкә күстем. Әлеге эшем буйынса бик күп йөрөргә тура килә. Күрше ҡалаларҙа, Белоретта булһынмы, Магнитогорскиҙамы - үҙебеҙҙең яратып ҡына инеп ашап сыҡҡан урындарыбыҙ бар. Ашханаларға иң беренсе инеп сыҡҡаным һыҡ хәтеремдә ҡалды, сөнки ашханала эшләүселәр: "Һеҙ әллә уҡытыусымы?" - тип һораны. Мин бик нык ғәжәпләндем, сөнки ябай ғына эш кейемендә инем. Базала минең кеүектәр туп-тулы... "Маңлайыңыҙға яҙылған", тип көлөп үк ебәрҙе Магниттағы мәрйә апай. Ләкин, нисек кенә ҡыҙыҡһынып һорашһам да, минең уҡытыусылыҡты ҡайҙан белгәнен аңлатманы. Ә Белореттағы икенсе бер апай минең кеүек уҡ һүҙсән булып сыҡты:"Үҙүҙенде тотоуҙан, атлап килеүеңдән белдем. Унан - тап уҡытыусылар кеүек талапсан ҡарайһың", - тине ул...

Булмышыңа һалынғас, эш урынын ғына алыштырып, уҡытыусы булыуҙан туҡтап булмай икән. Әлеге уҡытыусылыҡ сифаттары бөгөнгө эшемдә алға ебәреүгә бик нык аяҡ сала: һәр саҡ бөтә нәмәне намыҫ бизмәнәнә һалып үлсәү, кешене үтә нык йәлләү, хәлен аңлап ҡарау һәм башҡа шундай "артыҡ" йомшаҡ сифаттарым арҡаһында йыш ҡына отолам, алданам. "Башҡа улай итмәйем!" тип анттар биреп бөтәм, ләкин ваҡыт үтеү менән тағы шул уҡ "уҡытыусылыҡ" сифаттары тоҙағына эләккәнемде һиҙмәй ҙә ҡалам. "Булмай һинән!" тип, ҡул һелтәй ирем һәм минең еткереп эшләй алмаған эшемде ҡатыраҡ бәрелеп, урынлы ғына итеп үҙ һүҙен әйтеп, тамамлап ҡуя...

Шулай ғүмер буйы уҡыйбыҙ. Тормош юлыбыҙҙа беренсе уҡытыусыбыҙҙан башҡа ла күп уҡытыусылар осрар әле. Һикәлтәле ғүмер һуҡмағының һәр бер боролошонда улар беҙҙе илатып та, көлдөрөп тә, ҡайғыртып та, шатландырып та дәрес бирер. Ә ул тормош дәрестәрен нисек үҙләштереүең тик һинең үҙеңдән генә тора...

**Мәҙинә ЙӘҒӘФӘРОВА.**
**Әбйәлил районы Исхаҡ ауылы.**

*ТАРИХИ ХӘҠИҠӘТ*

**Тарих фәндәре кандидаты, Башҡортостан юлдаш телеканалының билдәле журналисы Салауат ХӘМИҘУЛЛИНдың "Башҡорт ырыуҙары тарихы" серияһы, халҡыбыҙ тарихының ҡайһы бер биттәре тураһындағы яҙмаларын дауам итәбеҙ.**

# ҠАН БУЙЫНСА БАШҠОРТТАР...




## тамырҙарын иҫкә төшөрһөн

### Туратау ҡалаһы, ҡуңғраттар, Гәрәй хан

Кәрәит ханлығы тарҡалғандан һуң, уның халҡы Монголстандың төрлө төбәктәренә күсерелә, Сыңғыҙхандың ғәскәрҙәренә таратылып бирелә. Әммә кәрәиттәрҙең бер өлөшө, В.В. Востров һәм М.С. Муканов фекеренсә, төньяҡ-көнбайышҡа күсенеп өлгөрә. Иртыш йылғаһының аҫҡы ағымына ҡарай йүнәлеп, улар Төньяҡ Ҡаҙағстанға барып етәләр. Бында улар үҙҙәренең элекке атамаларын үҙгәртеп, "кәрәй" тип атала башлайҙар. Әммә был ҡәбиләнең төп өлөшө Джучи улысына күсә. Үрҙә телгә алынған авторҙар кәрәиттәрҙең ошо өлөшө тураһында, улар үҙҙәренең элекке атамаларын һаҡлап ҡалалар һәм һуңынан ҡаҙаҡтар, нуғайҙар, ҡырым татарҙары, үзбәктәр составына инәләр, тип яҙа.

Башҡорттарҙың гәрәй ырыуына килгәндә, Р.Ғ. Кузеев иҫәпләүенсә, уларҙың тамырҙары шулай уҡ кәрәиттәрҙең көнбайыш төркөмөнә ҡарай. "Уларҙың Гәрәй исемле ата-бабаһы Ҡыпсаҡ менән бергә Иҙел буйында күсенеп йөрөгән", тип яҙа автор. Башҡортостанға килгәс, улар Ағиҙел буйына, хәҙерге ваҡытта Гәрәй иле тип йөрөтөлгән ергә күсенеп килә. Бында уларҙың атамаһында күплекте аңлатҡан "ит" ялғауы төшөп ҡалып, гәрә (гәрәй) тип атала башлайҙар.

Раил Кузеев башҡорт һәм ҡаҙаҡ гәрәйҙәренең тамғаларында ҡуңғрат ҡәбиләһе менән уртаҡлыҡ булыуына иғтибар итә. Ҡуңғрат Алтын Урҙа ханлығының бер осоронда алдынғы урындарҙы алып торған ҡәбилә була. Кузеев иҫәпләүенсә, гәрәйҙәр ҡуңғраттар йоғонтоһонда була, ошоға нигеҙләнеп ул: "Ҡыпсаҡ ырыуы башҡорттары кәрәйҙәр (кәрәиттәрҙең бер тармағы) һәм ҡуңғарттар менән ҡатнашҡан Дешт-и-Ҡыпсаҡ ҡыпсаҡтарының тоҡомдары булып тора", - тип яҙа. Тарихсының фаразы ошо темаға арналған башҡа хеҙмәттәрҙә лә яңы дәлилдәр менән нығытыла. Шундай хеҙмәттәрҙең береһендә ике төрлө сығанаҡтан теркәлгән риүәйәттәр килтерелә. Тәүгеһе Әхмәтйән улы Нурмөхәмәт исемле кешенең йылъяҙмаһында һаҡланған. "Өфө ҡалаһы янында, Дим йылғаһы Ағиҙелгә ҡойған урында, Ҡуңғрат тип аталған ҡәлғә булған. Ул ҡәлғәнең кешеләре Ургенчҡа күскәндәр. Ҡәлғә төҙөп, уны Ҡуңғрат тип атай башлағандар (Ҡарағалпаҡстанда урынлашҡан Ҡуңғрад ҡәлғәһе хаҡында һүҙ бара). Ағиҙел йылғаһы буйында Туратау (Торатау менән бутамаҫҡа) тип аталған тау бар, Тура - ҡуңғрат ханының исеме. Ошо тауҙың башында ... ул ҡәлғә төҙөгән. Шуға ла уны Туратау тип атағандар. Бөгөнгө көндә ул урында был ҡәлғәнең емереклектәре генә ҡалған", - тип яҙылған был йылъяҙмала. Ысынлап та, элек булған ҡәлғәнең соҡорҙарының һәм урҙарының ҡалдыҡтары бөгөнгө көнгә тиклем һаҡланып ҡалған. Икенсе риүәйәт XIX быуатта Өфө ҡалаһының башлығы булған Д. Волковтың яҙмаларында осрай: "Турахандың подданныйлығы аҫтында нуғайҙар менән башҡорттарҙың мең ырыуының 12 улысы кешеләре булған. Әлеге ваҡыттағы Өфө ҡалаһы урынында Туратау тип аталған ҡала урынлашҡан..." Рычковта ла оҡшаш мәғлүмәт осратабыҙ: "Русь Ҡаҙан ханлығын һәм башҡорттарҙы яулағанға тиклем үк, әлеге Өфө урынында ҙур ҡала булған..." - тип яҙа ул. Тикшеренеүселәрҙең раҫлауы буйынса, нуғайҙар үҙҙәре монументаль ҡоролмалар төҙөмәгән, ә алдан булған нығытмалар менән ҡулланған. Тимәк, Туратау башҡорттар Нуғай Урҙаһына ингәнсе үк булған. Быны раҫлаған башҡа яҙма дәлилдәр ҙә бар (Мәҫәлән, Өфө ҡалаһы урынында ағалы-ҡустылы Пициганиҙарҙың - *Pascerty*, Авраам Крескестың Каталон картаһында - *Pascerty* тип аталған ҡала билдәләнгән). Күптән түгел Алтын Урҙа тарихсыһы Үтәмеш хаджиҙың "Сыңғыҙнамә"һе баҫылып сыҡты. Унда ла әлеге Туратау хаҡында телгә алына.

Шулай итеп, Туратау ҡалаһы (ошо уҡ ҡала Башҡорт ҡалаһы тип тә йөрөтөлә) әлеге көндә Өфө ҡалаһы урынлашҡан урында була. Телгә алынған Нурмөхәмәт исемле кешенең яҙмаһына ярашлы, унда Ҡунғрат ҡәбиләһе ханы идара итә. Әммә Йомран-Табын ырыуы башҡорттары шәжәрәһендә Гәрәй исемле хан тураһында һүҙ бара. Шулай уҡ башҡа башҡорт йылъяҙмаларында ла Гәрәй хан хаҡында әйтелә. Тимәк, Раил Кузеевтың ҡуңғрат менән гәрәйҙәрҙең симбиозы тураһындағы фаразы дәлил таба. Турахандың кем булыуы мәсьәләһен ситкә ҡуйып, гәрәйҙәр менән ҡуңғраттарҙың Ағиҙел йылғаһының урта ағымында йәшәүҙәрен һәм башҡа башҡорт ырыуҙары араһында өҫтөнөрәк урын алып тороуҙарын әйтергә була.

Ю. Йосопов фекеренсә, XIV быуатта Башҡортостанда Турахан ханлығы тип аталған шартлы сәйәси ойошма барлыҡҡа килә. Унда алдынғы урынды ҡуңғрат менән гәрәйҙәр биләй. Тарихсы В. П. Юдин билдәләүенсә, XIV быуатта Көнсығыш Дешт-и-Ҡыпсаҡта идара ырыу бейҙәренең ҡулына күсә, шул уҡ ваҡытта Сыңғыҙхан тоҡомдарының власы ла һаҡланып ҡала. Бәлки, тап ошо осор "Дәфтәр-и-Сыңғыҙнамә"лә башҡорттар тарафынан "алтын быуат" булараҡ маҡтап телгә алына. Шулай уҡ Б. Аҙнабаев билдәләүенсә, "Дәфтәр..."ҙә, башҡорттарҙың аҫабалыҡ хоҡуғын башлап ебәреүсе кеше Сыңғыҙхан булған, тигән фекер ҙә ята.

Бөгөнгө көндә башҡорт ырыуҙары номенклатураһында ҡуңғраттар юҡ. Бының сәбәбен уларҙың аҫабалыҡ хоҡуғына эйә булмауҙарында күрергә була. Урал аръяғы башҡорттары һуңға тиклем Күсем хандың варыҫтарына тоғролоҡ һаҡлай, уларҙың тарафташтары, ғәскәрҙәренең төп көсө була. Шуға күрә лә Уралдың бирьяғында йәшәгән башҡорттарҙан айырмалы рәүештә, улар тик XVII быуаттың башында ғына яуланып алына. Ошо сәбәпле ҡуңғраттар аҫабалыҡ хоҡуғынан мәхрүм ителә, ә Рәсәй хөкүмәте тап уларҙың ерҙәрендә иң тәүҙә ҡәлғәләр төҙөй башлай, Һөҙөмтәлә, башҡорттарҙың тылында Исәт провинцияһы (бөгөнгө көндә Силәбе өлкәһе территорияһы) барлыҡҡа килә. Ҡуңғраттарҙың ерҙәре тартып алына, үҙҙәре припущенниктарға әйләнә, һуңынан башҡорттарҙың башҡа ырыуҙары менән ҡушылалар.

**Азамат САЛАУАТОВ әҙерләне.**
**(Дауамы бар).**

*ТАРИХ ЯРСЫҠТАРЫ*

# ӘЛМИСАҠТАН...

➔ **250 миллион йыл элек** - планетабыҙҙың ҡыҫылыу күренеше сәбәпле, Төньяҡ Боҙло океандың көнсығышынан алып Арал буйы далаларына тиклем Урал тауҙары барлыҡҡа килә.

➔ **Беҙҙең эраға тиклем 75-40 мең йылдар элек** - Уралда тәүләп кеше йәшәй башлай.

➔ **Б.э.т. 40-12 мең йылдар элек** - Уралда ҡәбилә-ырыу йәмғиәте башлана.

➔ **Б.э.т. 5-3 мең йылдар элек** - Уралда матриархат сәскә атҡан осор.

➔ **Б.э.т. 2 мең йыл элек** - башҡорт халҡы үҙенең бөйөк "Урал батыр" эпосын ижад итә.

➔ **Б.э.т. 2 меңенсе йылдарҙа** - Урал халыҡтары патриархатҡа күсә башлай.

➔ **Б.э.т. 2 меңенсе йылдарҙың икенсе сирегендә** - Волганан Иртышҡа тиклем башҡорттар Арҡайым, Һынташ, Таналыҡ кеүек 70 ҡала төҙөй.

➔ **Б.э.т. VII-IV быуаттар** - Урал буйы далаларында - сарматтар.

➔ **Б.э.т. VIII-VI быуаттар** - Тимер быуат башы. Көньяҡ Уралда савроматтар мәҙәниәте.

➔ **Б.э.т.VII-VI быуаттар** - Аристей Проконнес сәйәхәте булған тип фараз ителә. Тап сәйәхәте уны "Аримаспея"поэмаһын ижад итеүгә илһамландыра. Әҫәрҙә төньяҡта йәшәүсе халыҡ, шул иҫәптән улар араһындағы гиперборейҙәр тураһында бәйән ителә. Поэманы яҙыуға 1 700 йыл үткәс, Европа халҡына был ерҙәрҙә ысынлап та тауҙар булыуы - һәм уның Көньяҡ Урал тауҙары икәнлеге - асыҡлана. Поэма Геродотҡа, шулай уҡ боронғо донъяның башҡа ғалимдарына билдәле була.

➔ **Б.э.т. II быуаттар** - Үҫешкән патриархат.

➔ **Беҙҙең эралағы II быуат** - Клавдий Птолемей донъяның үҙенә билдәле өлөшөнөң картаһын төҙөй, унда Гиперборейҙар, Рифей, Норос һәм Риммикай тауҙарын һыҙатландыра. Риммикай, ихтимал, - ул Көньяҡ Урал (йәғни Мугоджар). Картаға шулай уҡ Урал һырттарына оҡшап торған Имаус тауҙары төшөрөлгән, ә Даикс йылғаһы Яйыҡты (Урал) хәтерләтә.

➔ **Б.э.II-VIII быуаттар** - Башҡортостанда бахмутин мәҙәниәте осоро.

➔ **VIII-X быуаттар** - ғәрәп һәм фарсы ғалимдары һәм сәйәхәтселәренең яҙмаларында башҡорттар телгә алына.

**Дәүләт МӘҺӘҘИЕВ төҙөгән.**

*БАШҠОРТ ҠАМУСЫ*



*Сергей РУДЕНКО*

# БАШҠОРТТАР

## Сәнғәт һәм фольклор

Башҡорт халыҡ ауыҙ-тел ижады күп төрлө һәм бик бай. Ул төрлө жанрҙарҙы үҙ эсенә ала. Араларында героик эпос, әкиәттәр һәм йырҙар бар. Башҡорт фольклоры буйынса күп материал йыйылды, шулай ҙа башҡорт халҡының ауыҙ-тел ижадын өйрәнеү буйынса ҙур эш башҡарырға кәрәк.

Башҡорт героик эпосы төрлө йөкмәткеле героик ҡобайырҙар-иртәктәр формаһында һаҡланған. Миҫал итеп мифологик йөкмәткеле, мәңгелектең үлемдән көслөрәк булыу идеяһы һалынған Урал батыр тураһындағы ҡобайырҙы килтерергә була. "Күҫәк бей" иртәге бөрйән һәм ҡыпсаҡ ырыуҙары араһындағы көрәш - ҡарымта тураһында бәйән итә. "Ҡуҙыйкүрпәс" һәм "Иркәбай" иртәктәре, тәүгеһендә көнкүреш, лирик элементтар күп урынды алып торһа ла, башҡорт халҡының монгол иҙеүенә ҡаршы азатлыҡ көрәшен сағылдыра.

Башҡорт халыҡ әкиәттәре бигерәк күп төрлө. Улар араһында батырҙар тураһындағы әкиәттәр циклы айырым урын биләй. Шулай уҡ тылсымлы, көнкүреш, тәрбиәүи йөкмәткеле, хайуандар тураһындағы әкиәттәр һәм әкиәт-легендалар бар.

Батырҙар тураһындағы эпик ҡобайырҙар күп осраҡта үҙенең стилен һәм шиғри формаһын юғалтҡан. Уларҙағы героик сюжет әкиәткә хас проза формаһында ҡалған. Геройҙары тарих сиктәренән сығып, мөғжизәле әкиәттәрҙәге кеүек мифик заттар менән көрәшә.

Тылсымлы әкиәттәрҙә кешенең тәбиғәт көстәренә ҡаршы көрәшеүе һәм уларҙы еңеп сығыуы бәйән ителә. Бындай әкиәттәрҙә һүрәтләнгән аждаһа, юха, бәрей, дейеү, мәскәй һ.б. күпселек осраҡта кешелеккә ҡаршы булһа, толпар, кеше телендә һөйләшеүсе бөркөт, сәмреғош төп геройға ярҙам итә. Батырҙарға уларҙың көрәшендә серле предметтар: кейһәң, күҙгә күренмәҫкә әйләндергән кәпәс, үҙе сапҡан ҡылыс, тереһыу, батырға бәлә килгәндә осонан - ҡан, уға уңыш йылмайғанда һөт тамған ҡурай һ.б. ярҙам итә. Ҡағиҙә булараҡ, бындай бындай әкиәттәр геройҙың еңеүе менән тамамлана.

Көнкүреш һәм тәрбиәүи әкиәттәр ғәҙәттә ғәҙелһеҙлекте һәм яуызлыҡты асып һала. Көнкүреш әкиәттәренең төп геройы Таҙ, әкиәт башында күрмәлекһеҙ, тәжрибәһеҙ, аҡылһыҙ булып күренһә лә, әкиәт һуңында барыһынан да аҡыллыраҡ һәм көслөрәк булып сыға. Көнкүреш әкиәттәрендә геройҙар үҙҙәренең шәхси бәхете өсөн көрәшкәндә социаль тормош ғәҙелһеҙлектәрен фашлай.

Әкиәт геройҙары юғары рухи сифаттары: тыуған илгә сикһеҙ тоғролоҡ, ҡыйыулыҡ һәм ҡаһарманлыҡ менән айырылып тора.

Башҡорт халыҡ йырҙары, ғәҙәттә, ҡыҫҡа - бер строфалы ғына һәм беренсе яртыһы икенсе строфа менән бөтөнләй бәйләнешһеҙ булыуы мөмкин. Бары тик икенсе һәм дүртенсе юлдар ғына рифмалаша. Күп строфалы йырҙарҙың тексы ниндәйҙер бер ваҡиғаны һөйләй һәм бер бөтөндө барлыҡҡа килтерә. Ундай йырҙар тотош Башҡортостанға таралған. Мәҫәлән: "Урал", "Буранбай", "Бейеш", "Зөлхизә", "Ҡаруанһарай", "Эскадрон", "Уйыл", "Ҡара юрға" һ.б.

***✓ Холоҡ ул - характер, ә характер - яҙмыш. Холҡоң ниндәй - яҙмышың шундай, тәҡдир генә үҙгәрешһеҙ. Сәбәп кенә ҡыл. Тимәк, бәхетһеҙ булып тойолған яҙмышыңды ыңғай юҫыҡҡа үҙгәртер өсөн дә 40 тәүлек етә түгелме?***

# "Киләсәкте тоҡандырыр

# үткәндең көлөнән

**Элекке хеҙмәттәшебеҙ, хәҙер "Ағиҙел" журналының баш мөхәррир урынбаҫары, шағир, прозаик һәм публицист Әхмәр Ғүмәр-Үтәбайға ошо көндәрҙә Аллаһы Тәғәлә ике "5-ле"не тыпылдатып тамғаланы. Әхмәрҙең башҡалар менән мөнәсәбәтендә үҙенсәлекле бер сифаты бар. Ул һәр төрлө йәштәрҙәге кешеләр менән аралашҡанда үҙен улар менән бер тигеҙ итеп тоя: сабыйҙар, балалар араһына барып сәләкһә, улар менән бергә уйнарға тотона, йәштәр араһында ла уларҙың зауығынан айырыла алмай, ололар араһында ла үҙ кеше. Уның был асылын түбәндәге әңгәмәһе ниндәйҙер кимәлдә аңларға ярҙам итер. Ҡыҫҡаһы, һүҙҙе Әхмәр ҒҮМӘР-ҮТӘБАЙҙың үҙенә бирәбеҙ.**

## Маҡталыуы ауыр

2015 йылға арналып сығарылған ҡайһы бер календарҙарҙа минә 55 йәш тулыуы хаҡында яҙғандар. Н-сы йәш тулыуҙы мин шартлы күренешкә тиңләйем, ә инде юбилейҙарҙы ҙур залдарҙа тантаналы билдәләүҙе артыҡ мәшәҡәткә һанайым. Бындай тантаналарҙа яһалмалыҡ күп була һымаҡ тойола миңә: барыһы ла юбилярҙы урынлы-урынһыҙға маҡтарға, бының өсөн үҙ-үҙен һәм башҡаларҙы алдарға мәжбүр. Шуға юбилей кисәләрендә лә булырға яратмайым, сөнки маҡтаған саҡтарында йыш ҡына юбиляр өсөн дә уңайһыҙлыҡ тойғоһо кисерергә тура килә. Кеше тәбиғәте шулай ҡоролған: әрләнеүгә ҡарағанда маҡталыуҙы күтәреүе ауырыраҡ.

Шуға күрә 50 йәшем тулыуҙы ла үткәрмәнем. Яҡташтарымдың инициативаһы менән тыуған яғымда саралар үтте үтеүгә (бының өсөн уларға сикһеҙ рәхмәтлемен). Баймаҡ районының Һикһәнләп ауылынан килгән инәйҙәр, апайҙар, ағайҙар, егеттәр, ҡыҙҙар, мәктәп уҡыусылары район китапханаһында минең шиғырҙарҙы һөйләп ярышты, аралашты. 2010 йылдың 10 февралендә үтте шиғыр бәйгеһе. Был көн минең өсөн шуныһы менән дә иҫтәлекле булды: тап шул кисә барғанда Өфөнән ҡыҙым Тамсы тыуыуы хаҡында хәбәр иттеләр. Бүләк алырға яратмаһам да, Хоҙай һәм кәләшем юбилейыма биргән бүләк тормошомдоң иң оло ваҡиғаһы булды.

Кешенең ысын йәшен рух һәм аң үҫеше кимәле билдәләй. Ә физик тән кеше рухының һәм аңының һауыты ғына. Ундай "һауыт" Хоҙай, тәбиғәт тарафынан рухтан һәм аңдан мәхрүм ителгән заттарҙа ла бар. Аһ-аһ, кеше үҙенең йән һауытының юбилейын үткәрәме, улай булғас? Кем белә, бәлки, мин рух һәм аң үҫеше кимәле буйынса мең йәшкә еткәнмендер, бәлки, сабый ғынамындыр. Икенсенән, юбилейынды үткәреү, кешеләрҙән үҙеңде ҡотлатыу, бүләк бирҙертеү, бәлки, башҡалар өсөн кәрәктер, ә миңә бөтөнләй кәрәк түгел. Ә бына ижадсы ғүмеренең ниндәйҙер бер баҫҡысында үҙенең ижади емештәре, китабы, һис булмаһа, уй-фекерҙәре менән уртаҡлашһа, бында мин бер ниндәй ҙә яһалмалыҡ күрмәйем. Йән "һауытым"дың ике 5-легә лайыҡ булған мәлендә гәзит уҡыусыларға ҡуйын дәфтәремдән алынған ҡайһы бер яҙмаларымды тәҡдим итеүем дә шунан килә.

## Холоҡ мөҙҙәте - 40 көн

Һүҙемде ҡыҫҡа ғына бер риүәйәт менән башлайым. Донъя менән хушлашыр алдынан атай кеше улын янына саҡырып алған да: "Донъялыҡта бер генә үкенесем ҡала: һине намаҙға баҫтыра алманым. Мин үлгәс, ҡырҡ көн һуҙымында көн һайын мәсеткә килеп, намаҙ уҡымаһаң да, мине иҫләп, ун биш минут ултырып сығырһың", - тип васыят әйткән. Улы атаһын ерләгәс, уның васыятын үтәгән, йәғни ҡырҡ көн буйы мәсеткә йөрөгән. Ҡырҡ беренсе көндә инде мәсеткә ул үҙе килгән һәм намаҙға ултырған. Ошо риүәйәттән сығып, ниндәй һығымталар яһай алабыҙ һуң? Һығымта түбәндәгесә булыр ине: ысынлап та, холоҡ мөҙҙәте - 40 көн, дөрөҫөрәге, 40 тәүлек. Кеше ошо ваҡыт һуҙымында бер үк ғәмәлде көн һайын башҡарһа, артабан инде ғәмәле - ғәҙәткә, ғәҙәте холоҡҡа әүерелә. Ә нимә һуң ул холоҡ? Холоҡ ул - характер, ә характер - яҙмыш. Холҡоң ниндәй - яҙмышың шундай, тәҡдир генә үҙгәрешһеҙ. Сәбәп кенә ҡыл. Тимәк, бәхетһеҙ булып тойолған яҙмышыңды ыңғай юҫыҡҡа үҙгәртер өсөн дә 40 тәүлек етә түгелме? Ошонан сығып, 40 һанының килеп сығышын да аңлатырға булалыр. 40, тимәк "ҡырҡылыу", мәҫәлән, кеше ғүмеренең йәшлегенән ҡырҡылған сағы, 40 - ҡырҡ тәүлек һуҙымында башҡарылған ғәмәлдең ҡырҡ беренсе тәүлектә холоҡҡа әүерелгән миҙгеле, йәғни ғәмәлдең холоҡҡа "ҡырҡылған" мәле.

Мәрйәм апай Бураҡаева "Йәйләү" йәйге лагерында ял иткән балаларҙың айға ла тулмаған ваҡыт арауығында танығыһыҙ булып ыңғай яҡҡа үҙгәреүе хаҡында ғәжәп итеп һөйләгәйне. Лагерҙа балалар милләтебеҙ йола-традициялары буйынса, йәғни көн һайын тиерлек шуға яраҡлаштырылған режим менән йәшәгәс, уларҙың ялын ойоштороусылар үҙ маҡсатына өлгәшә алған. "Бына ҡайҙа эт күмелгән булған икән", тиер ине ошо хәлде аңлаған урыҫ кешеһе.

Күренекле яҙыусыбыҙ Рәшит Солтангәрәев "Гәзит яҙыусыны эшләргә өйрәтә, әммә ижадсы гәзит редакцияһында биш йылдан артыҡ эшләргә тейеш түгел", тигән бик ҡыҙыҡлы бер фекер әйткәйне. Бында ла әлеге лә баяғы "холоҡ мөҙҙәте - 40 көн" принцибы сағылыш таба. Гәзитте ижад итеү һәм сығарыу механизмы шулай ҡоролған: унда тиҙ арала үҙенде-үҙең ижадҡа ойоштороп эшләй һәм йәшәй башлайһың. Мәҡәләне тиҙ арала, хәҙер үк яҙырға бурыслыһың, яҙмаһаң, гәзит сыҡмай ҙа ҡуя. Йәғни көн һайын, сәғәт һайын, минут һайын ошо гәзит, уның йөкмәткеһен яҡшыраҡ итеү хаҡында хәстәрлек күрһәң генә эшең килеп сыға. Һөҙөмтәлә был хәстәрлегең йолаңа, традицияңа әүерелә һәм, Рәшит ағай әйткәнсә, гәзиттә эшләү механизмы яҙыусыны эшкә өйрәтә.

Мин үҙем дә, мәҫәлән, үҙем иң төп һәм мөһим тип атаған әҫәрҙәремде "Киске Өфө" гәзите редакцияһында эшләгәндә яҙҙым. Эш араһында, баш мөхәррирҙән ваҡыт һәм форсат урлай-урлай ижад иттем. Күрмәмешкә һалышҡаны өсөн Гөлфиә Гәрәй ҡыҙына рәхмәт. Үҙемде мәжбүр итеп яҙырға ла өйрәтте миңә был гәзит.

Ә инде Рәшит ағайҙың гәзит редакцияһында биш йылдан артыҡ эшләргә ярамай, тигәне, моғайын да, ҡалыплашыуға бәйлелер. Сөнки оҙайлы ваҡыт һуҙымында көн һайын бер үк эште башҡарған саҡта кеше үҙ-үҙен ҡабатлай башлай. Бынан азат булыу мөмкин түгелдер. Мин, мәҫәлән, үҙемдә быны һиҙҙем. Улай ғына ла түгел, һуңғы йылдарҙа яҙылған проза әҫәрҙәремдә ниндәйҙер кимәлдә мәҡәләләр стиле һиҙелә башлауы ла гәзиттә биш йылдан артыҡ эшләүемдән килеп сыҡҡандыр, тим. Шуға күрә лә хәҙер "Ағиҙел" журналында эшләйем.

## Олатайым һабағы

Атайымдың бер туған ағаһы Мөбәрәк олатайымдың (Һаҡмарҙың урта ағымында олатай тиҙәр, башҡа яҡтарҙа - апа, бабай) бала сағымда биргән бер һабағы ғүмер буйы онотторлоҡ түгел. Бөйөк Ватан һуғышынан ҡайтҡандан һуң ул ең һыҙғанып колхозда эшләне. Беҙ уны сиктән тыш уҫал, талапсан кеше итеп хәтерләйбеҙ. Һәр хәлдә, бала аҡылыбыҙҙа ул шул рәүешле һаҡланып ҡалған. Ҙурая килә, шуны ла аңланым: уҫал булып күренһә лә, ул ҡайтымһаҡ та, күҙенә йәш алыр зат та, намаҙ уҡыған диндар ҙа булған икән. Баҡтиһәң, уның беҙгә уҫал булып күренеүе үҙебеҙҙең, ул саҡтағы тиҫтерҙәремдең тәртипһеҙлегенән һәм уның беҙҙең өсөн самаһыҙ борсолоп йәшәүенән килеп сыҡҡан.

Эш шунда: беҙ, малайҙар, бер мәл Һаҡмар аша һалынған аҫылмалы баҫманан тороп баш менән һыуға һикерә башланыҡ. Ә ул тәңгәлдә йылғаның тәрәнлеге бер метрҙан да артмай. Тәүҙә олатай беҙҙең янға килеп: "Нишләп улай итеп һикерәһегеҙ, балалар? Башығыҙҙы яраһығыҙ, муйынығыҙҙы һындыраһығыҙ бит..." - тип мәтриләп китте. Беҙ уның киткәнен генә ҡарап торҙоҡ та, тағы ла дәртләнеберәк, тағы ла шашыбыраҡ һикерергә тотондоҡ. Быны күреп, олатай ҡарт киренән йүгереп килеп етте лә, "әпсәһеҙҙәр..." кеүек зәһәр һүҙҙәрҙе ҡулланып, беҙҙе һыу эскеһеҙ итеп туҙҙырып әрләп, баҫтырып ҡайтарып ебәрҙе. Хәҙер инде беҙ олатайҙы бөтөнләй күҙҙән юғалғансы, туҙҙырыу сарпыуы баҫылғансы ситтән күҙәтеп, йәшеренеп-боҫоп ҡына баҫмаға яҡынланыҡ. Уның килгәне күренмәгәс, тағы ла һикерә башланыҡ. Хәҙер инде берәүебеҙ һаҡта тора. Йәғни олатайҙың килә ятҡаны күренһә, йәһәт кенә таябыҙ.

Олатай тактикаһын үҙгәртергә булды, йәғни өй беренсә йөрөп, беҙҙе атай-әсәйҙәргә ошаҡлап, был яман ғәҙәттән дүндерергә булып китте. Әммә уның был ысулы беҙҙе оторо ярһытты ғына. Ни өсөн тигәндә, тыйылған татлы була. Беҙ тағы ла шашыбыраҡ, хәҙер инде барыһы ла күрһен өсөн ҡысҡырып-һайтлап баҫманан һикереп һыу инә башланыҡ. Абайламай ҙа ҡалдыҡ, олатай беҙҙең янда ҡапыл пәйҙә булды. Үҙе бер нисә буш шешә ҡосаҡлап алған. Беҙ ни ҡасырға, ни һыуға сумырға белмәй, ҡатып ҡалдыҡ. Олатай ҡулындағы шешәләрен берәмләп ташҡа яра һуғып, быяла ярсыҡтарын беҙ сумған тәңгәлгә ташларға тотондо. Һуңғы шешә ярсығы Һаҡмар төбөнә төшөп ятҡас, тәмәкеһен тоҡандырып, алпыуан баҫып ҡайтып китте. Беҙ ауыҙыбыҙҙы асып тороп ҡалдыҡ...

Бөгөн килеп шуны аңланым: ул мәлдә олатайға асыуланһаҡ та, уны уҫал тип атаһаҡ та, шулай хаяһыҙ ҡыланып һыу ингәндә беҙҙең өсөн борсолған берҙәнбер кеше ул булған икән дә. Бәхетле осраҡ менән генә берebеҙҙең дә муйыныбыҙ һынмаған, башы ярылмаған. Беҙ үҙебеҙ ҙә һиҙмәҫтән оло кешене борсолорға ғына түгел, асырғанырға мәжбүр иткәнбеҙ. Олатай ул саҡта беҙҙең өсөн борсолоп, ауыл буйлап утҡа баҫҡандай, ут йотҡандай атлап йөрөгән. Һуңғы сиктә сығырынан сыҡҡан. Егет булғас, Һаҡмар төбөндәге шешә ярсыҡтарын таҙарттыҡ таҙартыуға, әммә хәҙер ул баҫманан һыуға баш менән һикереүсе балалар юҡ. Нисектер, һаман да унда быяла ярсыҡтары ята һымаҡ. Уйлаһаң, тән тартышып китә хатта...

Эйе, беҙ ҡайһы ваҡыт бер хәҡиҡәтте аңламайбыҙ шул: кемдендер беҙгә ҡарата ҡырҡыу мөнәсәбәте, уҫаллығы үҙебеҙҙән килеп сыға икән дә. Тыңлауһыҙ, тәртипһеҙ ейәндәрҙең олаталары һәм ҡартаталары, ғәҙәттә, йыуаш булыусан. Мөбәрәк олатай иһә, үҙенең оло кеше абруйын ҡорбан итеп булһа ла, беҙҙе аҡылға ултыртҡан. Яманлыҡҡа ҡаршы көрәшһәң, яманатлы булаһың инде ул...

## Тарихҡа мөнәсәбәтем

"Киләсәкте тоҡандырыр өсөн үткәндең көлөнән ҡуҙ эҙләйем" тигән Саҙритдин Айни. Был һүҙҙәрҙә тәрән генә түгел, дәһшәтле мәғәнә ята. Ни өсөн тигәндә, ысынлап та, үҙенең үткәнен белмәгән кешенең киләсәге ҡараңғы ғына түгел, бөтөнләй юҡтыр.

Үткән йылдың аҙағында, 22 декабрҙә, Хәйбулла районының Һаҡмар Бүреһе ауылында йәшәүсе мәшһүр йырауыбыҙ, һуғыш һәм хеҙмәт ветераны Мөхәммәтйән Ҡаҙаҡбаевҡа 90 йәш тулды. Шул айҡанлы гәзиттә яҙыусы Мәрйәм Бураҡаеваның "Ата балаһы" (2014, №48) тигән мәҡәләһе баҫылды. Унда олатайҙың әсәһе әйткән һүҙҙәре килтерелә: "Милләт ғорурлығы булмаған кешенең бар уй-фиғеле ашап-эсеүҙән ары китмәҫ. Әҙәп тигәне лә самалы ғына булыр. Китапһыҙ йәшәмәгеҙ. Боронғоно онотмағыҙ. Халыҡтың быуын сылбыры өҙөлһә, ҡалған яғы хайуанға әйләнә..."

Үҙ тарихыңдан, боронғо үткәнеңдән айырылыуҙы, өҙөлөүҙе, тарихыңды өйрәнеүгә илтифат бирмәүҙе боронғолар бына нимәгә әйләнеүгә тиңләгән. "Нимәгә һаман да тарихта соҡсонорға? Тарихты өйрәнмәгеҙ" тип әйтергә яратыусылар юғарылағы һүҙҙәрҙең мәғәнәһен аңларға тырышһын ине. Космополитизм маңҡортлоҡтоң һылтауымы?

Әхмәтзәки Вәлиди, Башҡорт ғәскәре ҡыҙылдар яғына сыҡ-

***✓ Беҙҙең ил граждандары булып киткән мигранттар, Европа илдәрендәге кеүек, үҙ милләттәренә сәйәси хоҡуҡтар давайлап, урамдарға сығыр. Был хәл инде дәүләтебеҙҙең тотороҡлоғона хәүеф менән янар.***

ҡандан һуң ҡоралһыҙландырылып, Ленин Башҡорт автономияһы тураһындағы килешеүҙе "ҡағыҙ киҫәге" тип атағандан һуң, сит илгә сығып китергә мәжбүр була һәм 1923 йылдың февралендә Ашхабадта "Башҡорт халҡына хушлашыу хаты" яҙа. Унда тарихты белеүҙең әһәмиәте тураһында бер һөйләм бар: "Мин үҙем, боронғоларҙы белгәнлектән, уңышһыҙлыҡҡа осраған сәғәттәрҙә һис бер ваҡыт күңел төшөнкөлөгөнә бирелмәнем..." Был һөйләмдәге һүҙҙәр шуны аңлата булыр: Вәлиди халҡыбыҙҙың үҙ үткәнендә бынан да ауырыраҡ хәлдәргә ҡалғандан һуң да үҙен һаҡлап ҡалып, артабан йәшәп китер көс таба алыуы тураһындағы тарихи ваҡиғаларҙы күп белгән. Икенсе төрлө әйткәндә, халҡыбыҙҙың нимәгә һәләтле булыуын нык тойған, шул арҡала үҙе лә күңел төшөнкөлөгөнә бирелмәгән. Вәлиди сығып киткән мәлде күҙ алдына килтереп ҡарағыҙ: милләтте һаҡларлыҡ дәүләт юҡҡа сығарыла, ғәскәр ҡоралһыҙландырыла, милләткә ҡаршы ҡыҙыл террор башлана, ауылдар туҙҙырыла, ир-аттар үлтерелә, ҡатын-ҡыҙҙар мәсхәрә ителә... Әммә был хәлдәр үҙ халҡының, башҡа халыҡтарҙың

# Өсөн... ҡуҙ эҙләйем"



тарихын яҡшы белгән Вәлидиҙең рухын ҡаҡшата алмай. Тарихынды белеүҙең милләт һәм айырым шәхес өсөн әһәмиәте бына нимәлә.

Яңыраҡ Башҡортостан Яҙыусылар союзы идараһы рәйесе урынбаҫары Спартак Ильясов прозаиктар менән тарихсыларҙың осрашыуын ойоштороҙо. Бик ваҡытлы һәм мөһим башланғыс. Маҡсаты: тарихсылар менән яҙыусыларҙы берләштереп, тарихи үткәнебеҙ, арҙаҡлы шәхестәребеҙ, батырҙарыбыҙ хаҡында тарихи романдар ижад итеү. Тарихи романдар беҙҙә ижад ителә ителеүгә, әммә һаман да тарихтағы бик күп һандағы "аҡ таптар" асыҡлауҙы, Кинйәләр үҙ Ибраһимовтарын, Салауаттар үҙ Злобиндарын көтә. Әйткәндәй, Салауат батырыбыҙҙың тулы тормош һәм көрәш юлын сағылдырған башҡорт яҙыусыһының романы, әле булһын, яҙылмаған. Аҫылғужа ағай Баһуманов был эште башланы, әммә ғүмере өҙөләүе арҡаһында тамамлай алманы. Бабич хаҡындағы романды кем яҙыр? Башҡорт халҡының рухи короле Зәйнулла Рәсүлев та роман-трилогияға торошло шәхес. Ҡаранайҙы, Йосоп, Аҡай, Бәпәнә батырҙарҙы, Баҙарғол Юнаев, Ҡаһым түрә, Аҡмулла, Әмир Ҡарамышев, Муса Мортазинды һ.б. кем һынландырыр?

Башҡорттарҙың урыҫ батшалығы менән Килешеү төҙөүенең 450 йыллығын билдәләгәндә Өфөгә Рәсәй Федерацияһы президенты Владимир Путин килде һәм сығыш яһаны. Ил башлығы үҙ сығышында башҡорт атлыларының нисек итеп Мәскәү Кремлен поляктарҙан азат итеп, Рәсәй дәүләтселеген һаҡлап алып ҡалыуы, урыҫ ғәскәрҙәре менән бер рәттән Парижды алыуы тураһында тарихи факттарға туҡталды. Ошо ике тарихи факт хаҡында ғына ла ике тарихи роман яҙырға була. Алыҫ китергә лә түгел: данлыҡлы Башҡорт атлы кавалерия дивизияһы хаҡында ла тулы полотнолы романыбыҙ юҡ.

## Ижад хаҡы

Совет осорон нисек кенә тәнҡитләмәһендәр, әҙиптәр ул ҡоролошта социаль яҡтан барыбер ҙә яҡлаулы һәм һаҡлаулы ине. Коммунистар ижадсыларҙың ҡәҙерен белде, уларға шарттар тыуҙырҙы һәм үҙ идеологияһын атҡарыу өсөн яҙыусыларҙы файҙаланды ла. Минең быуыным ижадсылары иһә, ул осорҙа нығынып та, быныһына өйрәнеп тә өлгөрмәне. Рәйес Түләк әйтмешләй, "заман бөгөлөшө нәҡ беҙҙең умыртҡа һөйәгенә тура килде һәм һындырҙы...", Дамир Шәрәфединов әйтмешләй, "Тик шуныһы, көтөү боролғанда, алға сыға малдың аҡһағы..."

Оло быуын яҙыусылары әйтеүенсә, әйтәйек, ул саҡта "Ағиҙел" журналында повесть йә поэма баҫтырһаң, уның гонорарына ҡатының менән бергә Ҡара диңгеҙ буйында ял итер өсөн ике путевка һатып алып, өҫтәүенә, ир үҙенә костюм, ә ҡатыны күлдәк һатып ала алған. Бөгөн иһә хәлдәр шулайыраҡ. Әйтәйек, яҙыусы романын материал туплау ваҡытын иҫәпкә алғанда, биш йыл эсендә яҙҙы икән, ти. Әҫәрен китап сығарыу өсөн тағы ла биш йылы китһә, дөйөм алғанда ун йыллыҡ ижади хеҙмәте өсөн, әйтәйек, нәшриәт уға 100 мең гонорар түләне икән, ти. Хәҙер килеп, үҙ ғүмерендә бер китап та уҡып ҡарамаған, интеллекты биленән дә түбән булған, әммә баҙарҙы һәм алыпһатарлыҡты яҡшы белгән йылғыр эшҡыуар 100 мең һумды бер көн эсендә эшләп таба. Шулай, интеллектуалдың аҫлы-түҫлы йәшәп, ун йыллыҡ хеҙмәте йылғыр эшҡыуарҙың бер көнлөк хеҙмәтенә тиң. Ошонан һуң ниндәйҙер ғәҙеллек, закон камиллығы хаҡында әйтеп буламы? Юҡ, әлбиттә. Дөрөҫөн әйткәндә, яҙыусылар, улар ғына түгел, ғөмүмән, интеллектуаль-ижади хеҙмәт әһелдәре хәҙерге ваҡытта тап ошондай нисбәт хөкөмөнә ҡуйылған да инде. Был нисбәт йәмғиәтебеҙҙең деградацияға барыуы тураһында һөйләй түгелме?

Әҙәбиәт йылында был тәңгәлдә ниндәйҙер үҙгәрештәр булмаһа ла, проблемалар һәм төп йүнәлештәр билдәләнеп, алдағы йылдарҙа интеллектуаль хеҙмәт кешеләренең хеҙмәтен баһалауҙа үҙгәрештәр көтөлөренә өмөтләнергә генә ҡала. "Киләсәктә китап уҡыусылар телевизор ҡараусылар менән етәкселек итәсәк" тигән бер аҡыл эйәһе. Был күҙлектән ҡарағанда, тик әле килеп ошо йылды Әҙәбиәт йылы тип атап, күпкә һуңланыҡ та кеүек. Сөнки хәҙер кеше китаптан күпкә алыҫлашып өлгөрҙө. Шуға күрә, хәҙер беҙгә һуң булһа ла уң булһын, тигән өмөт менән эш итергә ҡала. Ни өсөн тигәндә, компьютерға һәм интернетҡа бер өйрәнгән баланың ҡулына китап тоттороуы бик ҡыйын буласаҡ. Бәлки, был мөмкин дә түгелдер. Баланың компьютерын тартып алып, китап тотторһаҡ, уның күңелендә, киреһенсә, китапҡа ҡарата ытырғаныу тойғоһо ла барлыҡҡа килеүе ихтимал. Әммә "Мөхәммәт тауға бармаһа, тау Мөхәммәт янына килә лә ала" бит әле. Йәғни китапта яҙылғанды компьютерға индерергә лә була.

## Ауыл сәйәсәте - дәүләт сәйәсәте

Һуңғы ваҡыт илде, иҡтисадты модернизациялау хаҡында күп һөйләйҙәр һөйләүгә, әммә киң илебеҙҙең меңәр-меңәр саҡрымдарға һуҙылған баҫыу-ҡырҙарында, ялан-далаларында совет осорондағы кеүек гөрләп иген үҫмәүе, көтөү-көтөү малдары утлап йөрөмәүе был һүҙҙәрҙең буш булыуы хаҡында һөйләй. Билдәле яҙыусы Спартак Ильясовтың самолетҡа ултырып, илебеҙ өҫтөнән осҡандағы күргәндәрен ("Киске Өфө"нөң быйылғы 3-сөһаны) уҡығанда тыныс ҡалып булмай: "...Мәскәүгә тиклем арала сәселгән ужым да, ҡарайған һөрөнтө ер ҙә күрмәнем. Улар булмағас, иркен көтөүлектәрҙә мал-тыуар йөрөйҙөр, тим. Яландарҙы, һыу буйҙарын эҙләйем. Әммә мыжғып йөрөгән һарыҡ, йылҡы, һыйыр малдары көтөүҙәренең әҫәре лә юҡ. Әле бит ер өҫтөнә ҡар ятмағайны. Шулай уҡ көҙгө ураҡтан һуңғы оҙон-оҙон итеп өйөлгән эҫкерттәрҙе, кәбәндәрҙе лә шәйләмәнем. Күңелде шунда уҡ ҡурҡыу тойғоһо солғап алды..." Быларҙы яҙыусы ғына түгел, академияла уҡып, махсус юғары белем алып, утыҙ йылдан ашыу совхоз директоры булып эшләгән, оло тормош тәжрибәһе туплаған ауыл хужалығы белгесе яҙа. Спартак ағайҙың борсолоуҙары урынлы, был хаҡта барыһы ла белә. Әммә ауылға һуңғы йылдарҙа иғтибарҙың кәмеүенең сәбәптәре лә етди һәм нигеҙле кеүек. Йәғни ауыл хужалығының табышһыҙ тармаҡ булыуы, икенсе һүҙ менән әйткәндә, бер центнер игенде етештереү өсөн киткән сығымға сит илдән биш-ун центнер иген һатып алыу мөмкинлеге барлыҡ иллюзияларҙы юҡҡа сығара. Беҙҙә шулай: ерҙе һөрөп, иген сәсеп икһәң, муйындан бурысҡа батаһың, ә сит илдән һатып алһаң - мандыйһың. Был яҡҡау бәхетле була, тигән мәҡәлде иҫкә төшөрә.

Икенсе бер мәсьәлә. Фәндең, техниканың йылдам үҫеше хәҙерге заманда ауылда эшсе көстәрҙең элеккесә күпләп булыуын талап итмәй. Белгестәр ауылда барса халыҡтың 10-15 проценты ҡалған хәлдә лә, улар ҡаланы туйындырырлыҡ ҡеүәткә эйә, ти. Шуға күрә, ҡалғандар тиҫтә йыл эсендә ҡалаға күсеп бөтөргә тейеш, тип иҫәпләй. Әгәр ҙә ошо хәл күҙәтелә ҡалһа, илебеҙҙең дәүләт булараҡ һаҡланып ҡалыуына оло ҡурҡыныс янауы бар. Ни өсөн икәнен аңлатып ҡарайым.

Демография мәсьәләһен хәл итеүҙә һәр дәүерҙә, һәр дәүләттә ауыл ҙур роль уйнаған. Быға аңлатма ла кәрәкмәйҙер. Комфортты беренсе урынға ҡуйған ҡала кешеһе ғаиләһендә балаларҙың һаны берәү-икәүҙән артмай. Өс балалы ғаиләләр бик һирәк, улары ла, асылда, ауылдан ҡалаға күсеп килеүселәр. Ауылдарҙа, киреһенсә, бер-ике-өс балалы ғаиләләр бик һирәк, күбеһендә дүрт-биш-алты бала. Ике балалы ғаилә демографик хәлде бер кимәлдә ҡалдыра, йәғни ике бала ата менән әсәне генә алыштыра һәм үҫеш нулгә тигеҙ. Һуңғы тапҡыр халыҡтың иҫәбен алыуҙа шул да мәғлүм булды: демографик тотороҡлоҡ илебеҙҙә, асылда, ауыл һәм сит тарафтан күсеп килеүселәр иҫәбенә һаҡланған. Киләсәктә ауыл халҡы күпләп ҡалаға күскән осраҡта ла тотороҡлоҡ һаҡланыр, уның ҡарауы, илебеҙҙә ситтән күсеп килеүселәрҙең һаны артыр һәм...Һәм уларҙың һаны критик массанан артып китһә, беҙҙең ил граждандары булып киткән мигранттар, Европа илдәрендәге кеүек, үҙ милләттәренә сәйәси хоҡуҡтар давайлап, урамдарға сығыр. Был хәл инде дәүләтебеҙҙең тотороҡлоғона хәүеф менән янар.

Шуның өсөн дә беҙ бер нисек тә ауыл сәйәсәтенә тик аҙыҡ-түлек етештереү объекты күҙлегенән генә ҡарай алмайбыҙ. Ауыл, иң беренсе нәүбәттә, дәүләттең тотороҡлоғон тәьмин итә торған, уның демографик мәсьәләһен хәл итә торған урын. Үҙен һаҡларға теләгән дәүләт иң беренсе нәүбәттә ауылын һаҡларға, уны дотацияларға бурыслы.

***Әҙәбиәт йылында был тәңгәлдә ниндәйҙер үҙгәрештәр булмаһа ла, проблемалар һәм төп йүнәлештәр билдәләнеп, алдағы йылдарҙа интеллектуаль хеҙмәт кешеләренең хеҙмәтен баһалауҙа үҙгәрештәр көтөлөренә өмөтләнергә генә ҡала. "Киләсәктә китап уҡыусылар телевизор ҡараусылар менән етәкселек итәсәк" тигән бер аҡыл эйәһе. Был күҙлектән ҡарағанда, тик әле килеп ошо йылды Әҙәбиәт йылы тип атап, күпкә һуңланыҡ та кеүек. Сөнки хәҙер кеше китаптан күпкә алыҫлашып өлгөрҙө. Шуға күрә, хәҙер беҙгә һуң булһа ла уң булһын, тигән өмөт менән эш итергә ҡала. Ни өсөн тигәндә, компьютерға һәм интернетҡа бер өйрәнгән баланың ҡулына китап тоттороуы бик ҡыйын буласаҡ. Бәлки, был мөмкин дә түгелдер. Баланың компьютерын тартып алып, китап тотторһаҡ, уның күңелендә, киреһенсә, китапҡа ҡарата ытырғаныу тойғоһо ла барлыҡҡа килеүе ихтимал. Әммә "Мөхәммәт тауға бармаһа, тау Мөхәммәт янына килә лә ала" бит әле. Йәғни китапта яҙылғанды компьютерға индерергә лә була.***

**ШУЛАЙ ИТЕП...**

**Маҡталырға, ҡотланырға яратмайым, тиһә лә, "Киске Өфө" гәзите коллективы талантлы яҙыусы һәм журналист Әхмәр Ғүмәр-Үтәбайҙы 55 йәшлек юбилейы менән ихлас ҡотлай. Маҡтау кешене боҙа, тигән хәҡиҡәт уға ҡағылмай икәнен белгәнлектән, беҙҙең баһалау, ҡотлау һүҙҙәребеҙ ҡәләмдәшебеҙҙе тағы ла дәртләндерер, юғарыраҡ ижад үрҙәренә әйҙәр, тип ышанабыҙ.**

# Матур тауым – Ямантауым...

Хикәйә

Фәрзәнә АКБУЛАТОВА



Наил Вәлиев һүрәте.

Ҡайтышлай Мәрйәм әбей тауҙар теҙмәһенән күҙен алманы. Тау араһынан нимәләр килеп сығыр, уны һағышлы уйҙарынан арындырыр кеүек ине. Ул мөғжизә көттө. Тик тауҙар ҡымшанманы. Бала саҡ кисерештәренән айырылырға кәрәк ине. Шуны аңлағандай, күк йөҙөн ҡапыл ғына болот ҡаплап алды. Баяғы сағыулыҡ тоноҡланды. Бала саҡ буяуҙары төҫһеҙләнде. Донъя күшекте...

- Апай, беҙҙең яҡҡа йәшәргә ҡайтҡын килмәйме?

- Мырҙағол ҡустым, мин йылы яҡты күптән үҙ иткәнмен. Унда буяҡтар сағыуыраҡ. Күк зәп-зәңгәр, Памирҙа тау баштарында ҡар ап-аҡ, күҙ сағыла. Унан бөтөн ерҙә сәскәләр. Бызырайышып балҡыған сәскәләр. Мин сағыу төҫкә, ундағы сағыу нурға ғашиҡ. Күҙ ҡамаштырғыс төҫтәр!..

Мырҙағол, бәлки, бүтәнерәк һүҙ көткәндер. Ул шымтайҙы. Бүтән һүҙ ҡатманы. Быны аңлаған Марианна һүҙҙе икенсе төрләрәк дауам итте.

- Әҙәм балаһының хистәре үҙгәреп тора. Тауҙар мәғрур. Улар ел-дауылды сабыр үткәрә. Тау итәгендә әҙәм ышыҡ эҙләй. Ул ышыҡты мин тыуған ерҙән ситтәрәк таптым шул...

- Урал тауҙары сабыр, - тине Мырҙағол, уның ҡарашы уйсанланды. - Һине бынан, апай, бик иртә алып киткәндәр шул. Күп нәмә иҫеңдән юйылған. Ләкин был тауҙар һине нисек итеп, ҡалайтып алып киткәндәрен күргән. Һинекен генә түгел... Нисәмә быуат башҡорт тормошона шаһиттар. Быуындар килә-китә, ә тауҙар меңәр йыл тора. Кешеләрҙән алда иң беренсе улар иртәнге ҡояшты сәләмләй, ә кисен иң аҙаҡҡы булып оҙата. Башҡортто ла шулай һаҡлағандар. Урыҫ һалдаттары баш күтәргән башҡорттарҙы яҙаларға, үлтерергә килһә, халыҡ тауҙар араһына ҡасҡан. Ағастарҙы ҡырҡып һирәгәйткәндәр, ә тауҙарҙы әлегә улайта алмайҙар... Тауҙарҙың тамырҙары тәрәнерәк.

- Тажикстанда тороп ҡалыуымдың тағы ла бер сәбәбе бар. Мин альпинист. Ғүмер буйы ирем менән тауҙар үрләнек. Бына шул булды беҙҙе берләштергән шөғөл.

- Шулай икән дә.... - Мырҙағол ысынлап тороп аптыраны. - Мәрйәм апай, мин һине ҡаяларға үрләргә саҡыра алмайым.

- Юҡ-юҡ, мин хәҙер ул йәштә түгелмен. Үҙ самамды беләм, - тип көлгән булды Марианна ҡарсыҡ. - Ләкин тирә-яҡ менән танышҡым килә.

- Аңланым. Бөгөн үк ҡайһы бер урындарҙы күрәсәкһең, апай.

Бына шулай уларҙы ултыртып йөрөткән машина бормалы юл буйлап елдерҙе. Марианна, арбалғандай, тирә-яҡтан ҡарашын айырып ала алманы. Йөҙө яҡтырғандан-яҡтыра ғына ине. Әсәһен күҙәтеп барған Ренард ҡәнәғәт тамаҡ ҡырҙы. Тыуған яҡ һауаһы шифаһылыр, әсәһе йәшәреп киткәндәй. Ә бит был яҡтарҙан айырылғанда уға ни бары дүрт-биш йәштәр тирәһе генә була...

Борма-борма юлдар.

- Ниндәй матур тау! Үҙенә бер башҡа айырылып тора, - тине бер мәл Марианна ҡарсыҡ.

- Матурмы? - тип ҡабатлап һораны Мырҙағол.

- Матур! Матурҙың исеме лә матурҙыр.

- Исемеме? Ямантау булыр уның исеме.

Марианна апайҙың күҙҙәре түңәрәкләнде.

- Был атама һәр саҡ минең хәтеремдә. Гәрсә, күргәнем булмаһа ла! Өләсәйем Ямантау тураһында һөйләй торғайны, - тине ул, ниһайәт.

- Әле лә уның тураһында төрлө һүҙ йөрөй. Беҙ бәләкәй саҡта өлкәндәр Ямантауҙа яман көстәр, дейеү-пәрейҙәр бар. Улар тауға килгән мал-тыуарҙы ҡыра, тип һөйләй торғайны. Бала-сағаны ул яҡҡа барыуҙан ҡаты тыйҙылар, - Мырҙағол йылмайғандай итте.

- Ә минең өләсәмдең өс улы дейеүҙәр менән алышырға сығып китә. Әле ул саҡта мәктәпкә лә бармаған бәләкәс малайҙар! Өлкәндәр бер булып эҙләп, табып алып ҡайталар тегеләрҙе. Эләккәндәр ата-әсәнән дә аҙаҡ. Ләкин улар Ямантау дейеүҙәре менән түгел, бөтөнләй икенсе яҡтан килгән дейеүҙәр менән алышып ҡорбан булдылар.

- Әсәй, ниндәй дейеүҙәр менән? Нишләп улар тураһында бер ҙә һөйләгәнең булманы? - тине Ренард.

Марианна ҡарсыҡ көрһөндө.

- Балалар йортонда үҫеп, бөтөн серҙе эскә йәшереп өйрәнгәнмен шул, улым. Бала саҡ хәтирәләрен мин мәңгелеккә күмгән һымаҡ инем.

- Ни өсөн, әсәй?

- Һорауыңа үҙең яуап бирерһең, тип уйлайым. Мин бер генә ваҡиғаны иҫкә төшөрәйем. Бер саҡ әсәйем менән ҡайҙандыр ҡырҙан ҡайтып киләбеҙ, киске эңергә ҡалғанбыҙ. Көтмәгәндә, айҙың тау башында әленеп торғанын күрҙем. "Айҙы тау тотҡан, айҙы кем ҡотҡарыр?" тием. "Юҡ, ул бит иң матур тауға белеп ҡунған, тауҙың тажы!" "Тау батшамы?" тип һораным. Быға тиклем бошонҡо килгән әсәм шундай рәхәтләнеп көлөп ебәрҙе, "Эйе, ә тау-батшаның исеме Ямантау!" тине, - Марианна иренен ҡымтып бер аҙ тын ултырҙы. - Был Ямантау тураһындағы мин белгән иң матур әкиәт... Иртәгәһен беҙҙең өйгә тентеү менән килделәр. Әсәйемде алып киттеләр. Бер ус башаҡ урлаған, тинеләр. Бурҙарға хөкөм ҡаты ине...

Мырҙағол ауыр итеп уфтанды.

- Һөйләгәнә булды.

- Урындыҡта өләсәм ауырып ята, ашарға бер нәмә юҡ. Шунан бер көндө мине күршеләргә алып инделәр. Ишек ярығынан ғына ҡарап торам. Ҡарттар килде. Нимәнеләр күтәреп алып сығалар. Оҙон ғына, юрғанмы-сепрәкме шунда. "Нишләп өләсәм нәмәләрҙе биреп сығарҙы икән? Беҙ хәҙер нимә ябынырбыҙ?" тип уйлайым. Бәхтиһән, был ҡарттар - мәрхүм булған өләсәмде зыяратҡа алып китеүселәр...

Бәләкәс Мәрйәм күрше апайҙар ҡулына тороп ҡалды. Был апайҙың үҙенең генә лә биш-алты ыбыр-сыбыр балаһы. Уларҙың үҙҙәренә йүнле ашарға юҡ. Мәрйәм көндәр буйы ас ултыра торғайны. Әсе ҡара икмәк ауыҙға эләкһә, оло бәхет. Эйе, мысай ононан бешерелгән икмәк күптәрҙе ҡотҡарҙы заманында. Балалар йортонда тәү тапҡыр арыш икмәгә ҡапҡас, Мәрйәм шатлығынан нишләргә белмәне. Ул сикһеҙ бәхетле ине. Балалар йортона эләгеүен бәхет тип ҡабул итте. Башта исемен икенсерәк итеп әйтеүҙәре сәйер тойолһа ла, ҡолаҡ тиҙ өйрәнде. Оло тәрбиәсе апайҙар дөрөҫ әйтәләр, исеме шулай булырға тейештер, тип уйланы. Мәрйәмләр ыңғайына үҙе лә уларса һупалай башланы. Бер йылдан кемдәрҙер уның хәлен белешергә килде. Аҡ яулыҡ бәйләгән апай нимәләр һөйләй, һораша, ә ул ауыҙын асҡан килеш ултыра бирҙе. Туған телен онотҡайны инде ҡыҙыҡай. Силәбе балалар йортонда үҫте. СССР тигән ил ҙур ине, ул тыуған яҡтарҙан һаман алыҫҡараҡ китте. Тау артында тағы ла тау барлығын Марианна һуңғараҡ яҡшы аңланы.

- Был яҡтың тауҙарына мөкиббән киттең. Мин уныһын яҡшы күреп торам, - тине шаяртыу ҡатыш улы Ренард.

- Әсәйем көнө-төнө эштә булған, ауырыу өләсәйем менән икәү генә ҡала инек. Ул әкиәттәр һөйләй торғайны. Шунан мин һорайым: "Тауҙар артында нимә бар? Һин һөйләгән әкиәт донъяһы шундамы? Әкиәттәр шунда йәшәйме? Унда ҡасан барабыҙ?" "Мин Урал тауҙары аша сыҡҡаным юҡ. Һин ҙурайғас, үҙең барып белерһең..."- ти торғайны мәрхүмҡәй.

- Әсәй, ауыр булһа, һөйләмә.

- Хәтирәләр кисергәндәремдән ауыр түгел. Юғиһә, ошоғаса мин уларҙы йөкләп йөрөтә алмаҫ инем, балаҡайым.

* * *

Ауыл зыяратында булып ҡайтҡандан һуң, сәйер бер тынысланыу кисерҙе Марианна әбей. Әсәһе, өләсәһе рухына үҙе белгән доғаһын уҡыны. "Мин оҙон ғүмергә булдым, ҡәҙерләрем. Һеҙҙән был донъяла йәшәгән йәшегеҙҙе күптән уҙып киткәнмен икән дә баһа. Эйе, йәш хисабынан ҡараған саҡта был донъялағы тәжрибәм ҙурыраҡтыр ҙа, ләкин үҙемдә һеҙҙең сабыйығыҙ итеп тоям. Шул тойғоно кисереү миңә рәхәтлек бирә. Миңә ҡусты бүләк иткәнең өсөн рәхмәт һиңә, әсәй. Туғанлыҡ хисе уянды миндә. Күпме ғүмер шуны белмәй йәшәлгән! Кеше был тойғонан тыш бик меҫкен. Гүйә, донъяның буяуҙарын күреүҙән мәхрүм һуҡыр шикелле. Мин бөгөн иҫ китмәле баймын!"

Ҡарт әсәләге үҙгәреште тойған улы шулай тип ҡуйҙы.

- Тыуған яғыңдың һауаһы, ысынлап та, килеште! Күҙҙәрең осҡонланып китте, әсәй.

- Ошо тыныс кистә минең күҙҙәге осҡондо күрә алғас, шәп, улым! - тине ҡарт әсә ҡәнәғәт тауыш менән. - Үҙемдең тамырлы, ватанлы икәнемде тойоу рухымды терелтте. Тормошомдоң үҙем белмәгән йәки күрергә теләмәгән яҡтары асылды. Улыҡайым, атайыңдың тыуған яҡтарын табырға ине. Ҡалай рухы шатланасаҡ! Бына шундай уйға килдем әле мин бөгөн.

- Хәлдән килгәндә эшләрбеҙ, - тине Ренард.

- Беҙҙе мәктәп йылдарында: илдә бер генә халыҡ - совет берлеге буласаҡ, тип тылҡып үҫтерҙеләр. Тәрбиәселәребеҙ, уҡытыусыларыбыҙ даими шулай тип торғас, беҙ балаларға нимә ҡала? Бер һүҙһеҙ шулай булырына ышандыҡ. Хатта шул көндөң тиҙерәк етерен теләнек. Ә бөгөн мин Башҡортостанға ҡайтып, туған-тыумасамды күреп-танышып, әсәйемдең ҡәберенә зыярат ҡылып, ҡандашарымдың миңә нисек өндәшкәнен ишетеп, үҙемде иң бәхетле кеше итеп тоям. Исемемдең матурлығын белеп китәм!

- Эйе, һинең исем матур, әсәй.

- Ҡара сәле, шулай тип әйтеүең генә булды, ана, болот араһынан ялт итеп ай килеп тә сыҡты!

- Тажикстандағы айыбыҙҙан айырыламы ул? Нисек һинең ҡарамаҡҡа?- улы шаян йылмайып яуап көтә. Ниндәй яуап ишеткеһе килә икән?

- Улым, мин бер төш күрҙем.

- Төш?

- Эйе, уны элек тә күргәнем бар ине. Ә бөгөн тағы ла асығыраҡ итеп күрҙем. Мин бәләкәй генә бала, имеш. Ямантауға ҡарап торам. Тау башына ай килеп ҡунды. Шунан тау башында бер һын хасил булды. Мин уның өләсәйем икәнен хәҙер яҡшы беләм. "Өләсәй, һин нисек Ямантауға мендең? Унда менергә ярамай бит? Ямանлығы тейер, үлтерер!" "Яман түгел ул, Мәрйәмем. Минең бер балама ла яманлығы теймәне. Уландарымды бүтәндәр үлтерҙе. Ямантауҙың әҙәм балалары өсөн һыҙланыуы яман. Был айҙы тотоп торорлоҡ хәлем бар. Ул аҙашҡандарҙың юлын яҡтыртыр". "Матур тауым - Ямантауым! Ысҡындырма, тотоп торсо түңәрәк айҙы, ярҙам ит өләсәмә. Мин менеп еткәнсе ысҡындыра күрмә! Беҙҙең өләсәм менән көткән кешеләребеҙ бик күп!" Мин ашығып-ашығып тауға үрләйем. Яҡтылыҡҡа ынтылам. Өләсәйем үҙе айға әйләнә. Үткәнебеҙҙе беҙ ҡалдырып киткән кешеләр яҡтылыҡ булып ҡала. Тышҡы яҡтылыҡтан тыш, эске яҡтылыҡ кәрәк. Берәүгә лә әйтмәһәм дә, зарланмаһам да, шул нурҙы һағынып йәшәнем. Мин яуап бирә алдыммы икән һиңә, улым?

Әсәһен тын да алмай тыңлаған Ренард яуап бирмәне. Дөрөҫөрәге, яуап урынына тамағына тығылған төйөрҙө генә йотто.

* * *

Аҙна һиҙҙермәй генә үтте лә китте. Ләкин кисерештәр бер ғүмергә бәрәбәр ине. Мәрйәм әбей ата-бабалары төйәк иткән ерҙән үҙе оя ҡорған яҡҡа тулы күңел менән китәсәк. Һөйөү менән тулы күңел буш була алмай. Мырҙағол ҡустыһын тау менән сағыштырҙы. "Тауҙар һаҡсылар шикелле. Улар был саф тәбиғәтте, саф күңелле кешеләрҙе һаҡлап уратып баҫҡандар, - тип уйланы ҡатын. - Ауылым, халҡым йәшәр".

- Мырҙағол ҡустым, инде һинең сират. Ғаиләң менән ҡунаҡҡа көтәбеҙ. Көтәсәкбеҙ.

- Буяуҙарға бай, буяуҙары сағыу төйәгеңде күрһәтмәксеһеңме? - тип көлгән булды Мырҙағол.- Тырышырбыҙ, апай.

Ҡапыл томан төштө. Марианна ҡарашы менән томан аша күрә ине, ул туймаҫтай булып, тирә-йүнде байҡаны.

- Эй, балҡыу ҙа һуң был донъя!..

- Томан бит, әсәй.

- Күңел күҙенә томан ҡамасау түгел, - тине әсә уйсан ғына.

Улының башына барып етте: "Әсәйем бит ошо томан эсенән күрә балҡыулыҡты. Ватан төҫөн..."

Тау ҡасмай. Тау сабыр. Тау уйсан. Тау аҡыллы. Тау тәрән тамырлы. Тау кеше ғүмеренә үлсәм. Кеше генә түгел, халыҡ ғүмеренең үлсәме.

Һәр кемдең менер үҙ үлсәме, үҙ бейеклеге булырға тейеш. Ул шул бейеклеккә менеп етмәйенсә, туҡталырға хаҡы юҡ. Памир тауҙарына Марианна гел шулай үрләй торғайны. Иң шәп альпинист булараҡ, күпме маҡтау ҡағыҙҙары, бүләктәр алды. Урал тауҙарына ул менмәне. Ғүмере буйы хәтерендә тотҡан Ямантауға яҡын килмәне! Ләкин ул иң ҙур бейеклекте яулағанын аңланы. Был бейеклекте халыҡ ғүмере менән генә үлсәп булалыр...

* * *

Дүшәнбе аэропортына килеп төшкәс, нишләптер, ҙур көҙгө ҡаршыһында туҡтап ҡалды. Ҡапыл ҡасандыр ишеткән юлдар иҫкә килеп төштө: "Ҡашыңды төймә, көҙгө, һин бит ни бары минең сағылыш ҡына..."

Көҙгө йылмайҙы. Бына шулай. Мәрйәмгә һинең эргәңдән күп тапҡырҙар үтергә яҙҙын. Йылмайып оҙат һәм йылмайып ҡаршыла. Уны Уралтау яғына оҙат һәм бер саҡ ул әйләнеп ҡайтмаһа, турһайма, ҡарайма. Донъяла күп нәмә онталғанын, ярсыҡланғанын беләһеңдер. Ләкин үҙ ватанын тапҡандар онталмай. Һин Мәрйәмдең үҙ бөтөнлөгән тапҡанын аңларһың. Ләкин ер тетрәп, үҙең онталғанға ҡәҙәр йылмайыуҙан туҡтама! Һин ватанлы!

(Аҙағы. Башы 4-се һанда).

✓ ***СССР-ҙың халыҡ артисы Елена Образцованың: "Ниндәй генә ауырлыҡ булһа ла, ярай әле бынан да насарыраҡ хәл булмаған, тип, Аллаһы Тәғәләгә рәхмәт уҡыйым", - тигәнен хәтерләйем.***



Аһ, ҠЫҘ-ҠАТЫН!



**Мәңгелек эстетик категорияларҙың береһе булған матурлыҡ төшөнсәһе кешелек тормошонда ҙур урын алып тора. Башҡорт халыҡ ижады өлгөләрендә лә ҡатын-ҡыҙҙар ай йөҙлө, ҡыйғас ҡашлы, йондоҙ күҙле итеп һүрәтләнә. Шул уҡ ваҡытта, халҡыбыҙ уларҙың тышҡы ҡиәфәтенә ҡарағанда, күркәм холҡона, уңғанлығына өҫтөнлөк биреүсән дә йәшермәй. Нимә һуң ул матурлыҡ? Ҡатын-ҡыҙҙың бәхете нимәнән? Башҡортостандың атҡаҙанған артистары - йырсы Миңзифа ИСҠУЖИНА һәм бейеүсе Рәмизә МӨХӘМӘТШИНА менән әңгәмәбеҙҙә ошо һорауҙарға яуап эҙләйәсәкбеҙ.**



# ЙӘШ БУЛЫУҘЫҢ СЕРЕМЕ?

## Изге уйлы булыуҙа!

**➔ Матурлыҡ - ул эске торошмо, әллә тышҡы ҡиәфәтме? Ҡатын-ҡыҙҙың матурлығы ниндәй сифаттарҙан хасил була?**

**МИҢЗИФА:** Ҡатын-ҡыҙ мотлаҡ матур булырға тейеш. Йәмһеҙ ҡатындар юҡ, бары ялҡауҙар ғына бар, тиҙәр бит әле. Шулай ҙа кеше эстән тыныс, йәшәйеше, эше менән ҡәнәғәт булһа, былар иң тәүҙә тышҡы матурлыҡта сағыла. Тормоштоң һәр өлкәһендә лә матурлыҡҡа ынтылған гүзәл заттарға гел һоҡланып ҡарайым. Үҙен матур тип иҫәпләгән ҡатын-ҡыҙ ғына ысын мәғәнәһендә сибәр була. Ана шул эске ышаныс, күңел тыныслығы күпкә мөһимерәктер, моғайын.

**РӘМИЗӘ:** Өлкәнәйә килә һинең холҡоң, уйҙарың йөҙөңдә нығыраҡ сағыла. Шуға ла һәр ваҡыт изгелекле, мәрхәмәтле, яҡты уйлы булыу кәрәк. Йәш саҡта кешенең уйҙары ла, йөҙө лә матур була. Ә ошо күңел торошон ҡартайғансы һаҡлау һирәктәргә генә бирелә. Беҙҙең халыҡта ҡатын-ҡыҙ өлкәнәйә килә тағы ла сибәрләнә. Бына Рәшиҙә Туйсинаны алып ҡарағыҙ, мин уның йылдан-йыл тағы ла ҡыҙыҡлыраҡ, сибәрерәк булып барыуын күрәм. Һис шикһеҙ, бында үҙ өҫтөңдә эшләү ҙә роль уйнайҙыр. Өлкәнәйә барған һайын, көҙгөгә йышыраҡ ҡарарға кәрәк.

Ҡатын-ҡыҙ үҙенә ышанырға ла бурыслы, шунда ғына ул тыштан сибәр буласаҡ. СССР-ҙың халыҡ артисы Елена Образцованың: "Ниндәй генә ауырлыҡ булһа ла, ярай әле бынан да насарыраҡ хәл булмаған, тип, Аллаһы Тәғәләгә рәхмәт уҡыйым", - тигәнен хәтерләйем. Динебеҙҙә лә булған был һабаҡты ғүмерем буйына иҫемдә тотоп, бар нәмәгә сабыр булырға, был ауырлыҡты ла еңәсәгемә ышанам. Үҙеңә ышаныс тойғоһо бар икән, һиңә бер нәмә лә ҡурҡыныс түгел.

Матур булыу өсөн туҡланыу ҙа, ялға дөрөҫ итеп ваҡыт бүлеү ҙә, башҡа нәмәләр ҙә инә. Мәҫәлән, мин ашарға бешерергә яратам, әммә бейеүсе булып эшләгәндә 15 йыл киске етенән һуң ҡатыҡ, кишер һәм алманан башҡа нәмә ашамаҫҡа тура килә ине. Шул ваҡытта нисәшәр килограмм эремсек менән адыгей сырын ашағанмындыр, быныһы үҙемә лә ҡыҙыҡ хәҙер. Әле лә хәтеремдә, Ф. Ғәскәров исемендәге Дәүләт академик халыҡ бейеүҙәре ансамбленән хаҡлы ялға сыҡҡас, ҡайтышлай уҡ "Прага" тортын һатып алдым. Ҡотларға, тип, дуҫтар килгәс, ярай, бер киҫәк аша инде, тиҙәр. Юҡ, мин әйтәм, мин уның яртыһын ашайым. Хәҙер үҙем балетмейстер булараҡ бейеүселәрҙе, артистарҙы туҡланыуҙа тыйһам да, үҙемде сикләмәйем.

**➔ Әсәйегеҙ, өләсәйегеҙҙең ҡатын-ҡыҙ асылына төшөнөргә ярҙам иткән кәңәштәрен, матурлыҡ серҙәрен хәтерегеҙҙә тотаһығыҙмы?**

**РӘМИЗӘ:** Әсәйем яғынан нәҫелемдәге бөтөн ҡатын-ҡыҙҙар ҙа үҙ ваҡыты өсөн бик уҡымышлы булған, улар ҡатын-ҡыҙҙар өсөн тәғәйенләнгән мәҙрәсәләрҙә белем биргән. Өләсәйем дә революцияға тиклем дини белем биргән. Шуға ла ул мине тәрбиәләү менән ныҡ шөғөлләнде, тыйылған әйберҙәр күп ине. Әле лә аҫтылы сынаяҡ менән сәй эсергә яратмайым, сөнки уны беҙҙең өйҙә бар тәртибенә килтереп, икенсе ҡулың менән сынаяҡ аҫтын да күтәреп, эсергә кәрәк ине.

Иң ҙур гонаһ - кеше һөйләү, ти ине өләсәй. Мәктәптән ҡайтып, ниндәйҙер хәбәр һөйләһәм дә, гонаһ, тип, тыя һала торғайны. Ҡыҙ кеше һәр ваҡыт тыйнаҡ, баҫалҡы булырға тейеш, тип тәрбиәләнеләр. Тормошта баҫалҡылыҡтың һинең файҙаңа булмауы ла ихтимал, тик шулай ҙа бала саҡтан ҡанға һеңгән нәмәләрҙән ситләшеүе ауыр.

**МИҢЗИФА:** Рәмизә әйткән тыйыуҙар, дин, халҡыбыҙҙың әхлаҡ ҡағиҙәләренең тәрбиәүи көсөн әйтеп торорға ла түгел. Атай йоҡлағанда өйҙә шауламай инек, әле үҙемдең ғаиләмдә шулай, бер-беребеҙҙән йоҡоһон һаҡлайбыҙ. Бешерергә яратам, был да әсәйемдән килә. 6 малай араһында 2 ҡыҙ тәрбиәләндек, шуға ла үҙемде наҙланып ҡына үҫтем, тип әйтә алмайым. Кереһенсә, гармунда уйнап, мотоциклда йөрөп, гармунсы егеттәр әрмегә китеп бөткәс, киске уйындарҙа йәштәрҙе бейетеп йөрөй торғайным. Мәктәптә бөткәс тә Өфөгә сәнғәт училищеһына уҡырға китә алманым. Әсәйем кейәүгә бирәм, тигәс, ҡасып, баш ҡалаға сыҡтыҡ та киттек өс ҡыҙ.

**РӘМИЗӘ:** Ғаиләлә ир баш, икенлеген дә уңайы сыҡҡан һайын әйтеп тора ине өләсәй. Ул миңә эпостарҙы, әкиәттәрҙе күп уҡыны. Ғаиләлә бер бөртөк булғанға күрә, куберәк яңғыҙым уйнаным, үҙем уйлап сығарған донъям да бар ине. Айҙағы ҡыҙҙы йәлләп, уйнағанда төрлө сюжеттар ҡора инем, уны ҡотҡарырға хыялландым. Ошо уйындарҙа аңымда идеаль ир-егет мотлаҡ батыр, ҡыҙ баҫалҡы булырға тейеш, тигән уй нығынды. Үҫкәс тә гел генә әкиәт батыры, идеаль ир-егетте эҙләнем.

**➔ Шулай ҙа тормошта ҡатын-ҡыҙҙың бәхете нимәнән?**

**РӘМИЗӘ:** Ғүмерҙең билдәле бер осоронда бәхетте төрлөсә аңлайһың. 20 йәштә һөйгән кешеңдең эргәңдә булыуы бәхет булһа, бөгөн, 50 йәшкә етеп барғанымда, бәхетте башҡаса күрәһең. 40 йәшкә еткәс, бер нәмәгә төшөндөм: ҡатын-ҡыҙ өсөн иң ҙур бәхет - бала. Улыма ҡарайым да, бушҡа йәшәмәгәнлегемә ҡыуанам. Ул мине әсәй итеп кенә түгел, яҡын дуҫы итеп ҡабул итә, был да бәхет. Әле улым Мәскәүҙә уҡый, ҡайтҡан сағында сәғәттәр буйына һөйләшеп туймайбыҙ. Әсәйем, өлкәнәйеп бөткән улың менән нимә тураһында һөйләшергә була, тип аптырай.

**МИҢЗИФА:** Һәр кемдең яратҡан эше булырға тейеш. Йырсы булараҡ, тормош иптәшем менән бергә эшләүемә бәхетлемен. Ул аңламаһа, терәк була белмәһә, миңә был һөнәрҙә ныҡ ҡыйын булыр ине. Нисә йыл тормошта ла, сәхнәлә лә бергәбеҙ, минең өсөн йырҙар ижад итә, уртаҡ маҡсаттар бар. Эшләмәй өйҙә генә ултырыуҙы бәхет һанаусылар бар, мин улай итә алмаҫ инем. Сәхнәгә сыҡмай торһаң, ҡыҫҡырып йырлағы килә башлай, шуға ла тағы ла бер тапҡыр һөнәр һайларға мөмкинлек бирһәләр, ошо уҡ юлды һайлар инем. Сөнки бала саҡтан хыялланған уйҙарыңдың тормошҡа ашыуы үҙе бәхет бит. Улыбыҙ бар, ҡыҙыбыҙ бар - был үҙе бер ҡыуаныс. Балаларҙы тәмле итеп ашатҡын килеүе шулай уҡ ҡатын-ҡыҙ бәхетенең бер өлөшө. Киленем менән әхирәттәргә әйләнә алдыҡ, бөтөн нәмәне уртаға һалып һөйләшәбеҙ. Улым менән киленемдең ғаиләһенә ҡыҫылмайым, күп нәмәне күрмәмешкә һалышам. Ә ҡыҙыма ҡатыраҡ булырға тырышам, атаһы иркәләтеүе лә еткән, ҡыҙҙы тыйып үҫтереү дөрөҫ ул.

**➔ Артист булараҡ, бөгөнгө заман шоу-мәҙәниәтен ҡуҙәтеп бараһығыҙмы, унда үҙегеҙҙең лайыҡлы урыныгыҙ булһын өсөн нимәләр эшләйһегеҙ?**

**МИҢЗИФА:** Милли эстрада саҡ үҫешә башлаған мәл менән сағыштырғанда, бөгөн миңә йәштәрҙең йыр һайлауға булған мөнәсәбәте оҡшай башланы. Халыҡ йырҙарын яҡшы итеп башҡарыусылар бар. Рита Өмөтбаева етәкләгән "Башҡорт йыры" проекты оҡшай, унда баһалаусылары ла, башҡарыусылары ла лайыҡ шәхестәр. Тик йәштәр халыҡ йырын ҡапыл ғына өйрәнәләр ҙә, сәхнәгә алып сыға ла һалалар. Халыҡ йырын улай ғына өйрәнеп булмай, уны йөрәгеңдән үткәреп, аңлап, яйлап, моңон тойоп башҡара башлайһың. Йәш йырсылар ошоға иғтибар итһә, яҡшы булыр ине. Көнә-төнә совхоз эшендә булған атайымдың табындарҙа ғына йырлағанын ишетеп үҫтек. Нық матур йырлай ине ул. Иремдең әсәһе шәп йырсы ине, атайым менән осрашһалар, гел йыр менән әйтеш ойошторалар ине.

**РӘМИЗӘ:** Программа төҙөгәндә тамашасының әлеге мәлдә ниндәй бейеүҙәргә өҫтөнлөк биреүенә иғтибар итергә тура килә. Шулай ҙа шоу яһайым, тип, стилләштерелгән бейеүҙәр ҡулланыуға ҡырҡа ҡаршымын, халыҡсанлыҡ һаҡланырға тейеш. Бейеүселәрҙе профессиональ һәм үҙешмәкәргә бүлеп ҡарайым, тик шунан башҡа улар араһында айырма юҡ, шуға ла талаптар ҙа бер үк. Халыҡ мираҫы һаҡланырға тейеш-эшемдә минең өсөн төп принцип шул. Оҙаҡ йылдар спектаклдәргә бейеүҙәр ҡуям, тағы бер һөнәрем буйынса режиссермын, бында ла принциптарыма тоғро ҡалам.

**ШУЛАЙ ИТЕП...**

**Матурлыҡ - йәшкә, һөйкөмлөлөк - матурлыҡҡа бәйле түгел. Кешенең шәхесен башҡалар уның дөйөм сифаттарынан, эске һәм тышҡы матурлығынан сығып билдәләй. Әммә быларҙың барыһы ла шәхси бәхетте гарантияламай. Шуға ла бөгөнгө ҡунаҡтарыбыҙ кеүек тыңәрәк бәхетле булырға теләһәгеҙ, уларҙың кәңәштәренә ҡолаҡ һалырһығыҙ, тип ышанабыҙ.**

**Изге уйлы булығыҙ, шул саҡ гел йәш һәм матур булып ҡалырһығыҙ.**

Ләйсән НАФИҠОВА
әңгәмәләште.

*АҒИНӘЙ ҺҮҘҘӘРЕ*

## БӘХЕТ БӘҪЕН...

### бәхетһеҙҙәр күберәк аңлай

- Эреләнмә, бүрткән борсаҡ, тиерҙәр.
- Шомоҡа - һүҙ, йөрөмтәл аҙым һанай.
- Кешенең алтын аҡылын тыңла - тыңламаусанлыҡ йүнһеҙлеккә этәрә.
- Тел ғәйрәтле ҡорал: тамуҡҡа ла төшөрә, күктәргә лә ашыра.
- Хәбәр - һуҡыр Хәбирә: алға һалып ултыра.
- Ике еңмеш сәкәләшкәндә, һалбыр ауыҙ илап торор.
- Елән кейһәң - елпенмә, сапан кейһәң - сапсынма, ҡотоң китеүе ихтимал.
- Урмансы - ағас, ғәйбәтсе тел үҫтерә.
- Үҙ-үҙеңә ышанысың бөтмәһен, югиһә, ярты ғүмерең яныр.
- Һәр ялҡын йылы түгел, туңдырғаны ла күп.
- Бәхетлеләр түгел, бәхетһеҙҙәр генә бәхет бәҫен аңлай.
- Ат ҡынамы, кеше лә дүрт аяҡлана.
- Нисек кенә оҫта ямаһаң да, ярының эҙе ҡала.
- Еңел килгән бәхет - бәхет түгел, тир түгеп, эҙләп тапҡан ҡәҙерле.
- Батыр йөрәгенең ялҡындарын ваҡыт елдәре һүндерә алмай.

Әнүәрә ХӘЙБУЛЛИНА.

ИНТЕРНЕТТАН



# ЙОҠОҢ ТУЙҺА...

## эш тә көйлө була

■ Эштә көнө буйы ултырып эшләһегеҙ, 1 сәғәт буйына физик күнекмәләр менән шөғөлләнеү ҙә һеҙгә сәләмәтлек өҫтәмәйәсәк. Торонтолағы Реабилитация институты ғалимдары 47 кешенең йәшәү рәүешен тикшереп ҡараған. Кем көнө буйы дөйөм алғанда 8 сәғәт тирәһе ултыра, башҡа факторҙарға ҡарамайынса, уларҙың диабет, һимереү, яман шеш, йөрәк ауырыуҙарына дусар булыу ихтималлығы ҙурая. Тикшеренеү авторҙары көнөнә 4-5 сәғәттән артыҡ ултырып эшләргә кәңәш итмәй, тороп бер аҙ хәрәкәтләнеп булһа ла алырға кәрәк.

■ Калифорния университеты психологтары кешенең ҡайһы бер сифаттары һәм иммунитеттың эшмәкәрлеген контролдә тотоусы гендар араһында бәйләнеш барлығын асыҡлаған. Аралашырға яратыусы, бер урында ултырып сыҙамаған кешеләр инфекцияларға бирешеп бара, шуға ла уларҙың иммунитеты көслөрәк, ә тыныс холоҡло кешеләрҙеке насарыраҡ эшләй икән.

■ Америка ғалимдары эш көнөн иртәнге ундан башлау яҡшыраҡ, тип белдерә. Ғалимдарҙың фекере буйынса, иртән 15-20 минутҡа оҙағыраҡ йоҡлау ҙа эшкә һәләтлелекте арттыра. Был аҙыраҡ эшләргә кәрәк, тигәнде аңлатмай. Эшкә бар иғтибарын йүнәлткән кеше йоҡоһо туймаған хеҙмәттәшенә ҡарағанда күпкә һөҙөмтәлерәк эшләүе барыһына ла билдәле. Кемдәрҙең эш көнө иртә менән башлана, улар тәүлегенә 6 сәғәт тирәһе йоҡлай. Был ваҡыт эсендә организм тулыһынса ял итеп өлгөрмәй. Был иһә эшләү һәләтенә лә, сәләмәтлек торошона ла кире йоғонто яһай.

■ Белгестәр газлы татлы һыуҙарҙың зыяны тураһында күптән белдерә, әммә уларҙан, тәү сиратта, йөрәк сирлеләр баш тартырға тейеш. Сөнки газлы эсемлектәр ҡан баҫымын күтәрә, етмәһә, һыу һалып һатылған банканың составындағы матдәләр ҙә бығa булышлыҡ итә. Тимер һәм пластик һауыттарҙы бисфенол менән ҡаплайҙар. Корея тикшеренеүселәре әйтеүенсә, быяла һауыттан башҡа һауыттар сәләмәтлек өсөн ҙур зыян килтерә. Бисфенолды элегерәк тә күп сирҙәргә килтереүҙә ғәйепләйҙәр ине, улар араһында баш ауыртыуы, һимереү, шәкәр диабеты, түлһеҙлек, инфаркт, хатта яман шеш тә бар. Европала балалар өсөн тәғәйенләнгән һауыттар етештергәндә бисфенол ҡулланыу тыйылған.

■ Йәмғиәттә ҡатын-ҡыҙҙар ирҙәргә ҡарағанда хис-тойғоға байыраҡ, тигән стереотип булһа ла, ғалимдар быны кирһен раҫлаған. 15 ғаилә башлығы һәм 15 ҡатын-ҡыҙҙан торған төркөмдә төрлө һынауҙар үткәргәндән һуң, көслө зат ҡайһы бер ваҡиғаларҙы ҡатын-ҡыҙҙарға ҡарағанда ике тапҡырға көслөрәк кисереүе асыҡланған, әммә улар үҙҙәрен хислерәк икәнен барыбер танымаған. "Гүзәл зат илағыраҡ, ул эмоцияларҙы ҡоло, тигән фекерҙе аңыбыҙға һеңдереп бөткәндәр. Тик ир-егеттәр был йәһәттән уларҙан һис ҡалышмай, кирһенсә, ҡайһы берҙә нығыраҡ ҡайғыра, ихласыраҡ шатлана. Йәмғиәттә был ирҙең көсһеҙлөгө булып ҡабул ителгәнгә күрә, улар тойғоларын күрһәтеп бармай. Бала саҡтан малайҙарҙы, ир кеше иламай, тип тәрбиәләүҙең йоғонтоһо ла бар был күренештә", - ти тикшеренеүҙең авторы Дэвид Льюис.

ХӘТЕРКИТАП



# "ТАМҒАЛЫ ҠАРАҒАЙ" ЯҘМЫШЫ

* * *

Сәғитов Әбделҡәйүм Сәғит улы 1879 йылдар тирәһендә зәңгәр тауҙар уратып алған хозур тәбиғәтле Ғәлиәкбәр ауылында крәҫтиән ғаиләһендә тыуған. Кесе йәштән үк теремек, отҡор, үтә ҡыҙыҡһыныусан, эшһөйәр бала була, аң-белем - мәңгелек ғилем икәнен аңлап, сит яҡтарға китеп уҡыу тураһында әсенән генә хыялланып йөрөй. Ауылдың дин әһелдәре йәш быуынды: "Бәйғәмбәребеҙ Мөхәммәт ғәләйһиүәссәләм әйткән: "Бер сәғәт ғилем алыу - төн буйы нәфел намаҙҙары уҡыуҙан хәйерлерәк, бер көн ғилем алыу өс ай ураҙа тотҡандан хәйерлерәк. Ғилем алыу - сауаплы ғәмәл. Һәр көн ниҙер өйрәнергә, белергә кәрәк. Туҡталып ҡалырға ярамай. Ғилеме барҙың телеме бар. Ғилем алған мосолман әжер-сауаптарға өлгәшә", - тип өйрәтер булған.

Ҡәйүм олатай, үҫеп, буй еткергәс, 16 - 18 йәштәр тирәһендә, атаһына ситкә китеп уҡырға теләүе тураһында әйтә. Кәләш алып, үҙаллы донъя көтөрлөк егетте, уң ҡанатын кем ете ят ергә ебәргеһе килеп торһон инде, билдәле: атаһы ҡаршы була. Улының уҡырға булған теләген атайҙың ризаһыҙлығы ла туҡтата алмай. Дәрт биргәнгә дарман бирер, ти. Өйөр айғырын Петровскийға алып барып, ун өс һумға һата ла, Стәрлетамаҡта яңыса белем биргән мәҙрәсәгә уҡырға инә Ҡәйүм олатай. Ул юл ыңғайы Көҙәндә Әхмәтшаһ хәҙрәттә туҡтап, ҡунып йөрөр булған. Ул замандарҙа мәҙрәсәләрҙә шәкерттәргә ошондай предметтарҙан дәрестәр бирелеүе билдәле: толкование корана, изречение пророка, законоведение, фараиз, основы законоведения, основы изречения пророка, всеобщая история, естествознание, физика и химия, педагогика, алгебра, арифметика, мораль, русский язык (был мәғлүмәттәрҙе Троицк ҡалаһындағы "Рәсүлиә"мәҙрәсәһендә уҡыған Йыһаншин Сабирйән мулланың шәһәҙәтнамәһенән алдым). Шулай итеп, олатай Стәрлетамаҡ мәҙрәсәһендә уҡып, белемле кеше булып ауылына ҡайта. Ауылда, яҡын-тирәлә русса яҡшы белгән берҙән-бер кеше була. Хәкимә өләсәй уның тураһында: "Хәснәтдин ҡайным, Садиҡ олатайыҙ, Сәғит олатайыҙ ауылда иң ҙур кәүҙәле кешеләр ине. Сәғит ҡарт үҙе баһадир кәүҙәле булһа ла, Әбделҡәйүме бәләкәй ине", - тип һөйләр булған ейән-ейәнсәрҙәренә.

Ҡәйүм олатай Стәрлетамаҡ мәҙрәсәһенә уҡырға керерҙән алда иң башланғыс белемде ҡайҙалыр алған булырға тейеш, тип фараз итәм. Бер ниндәй ҙә белем нигеҙе булмаған 16 -18 йәшлек егет ҡапылдан ҡубарылып сығып китмәгәндер, тимәк, Ғәлиәкбәрҙә боронборондан балаларға белем биреүгә иғтибар иткәндәр, һәм был эш тейешле кимәлдә юлға һалынған булғандыр, тип уйлайым. Үҙемдең Хәснәтдин олатайым, Нәсихә өләсәйем белемле кешеләр булған бит. Элек-электән ауылыбыҙҙа дин әһелдәренең дә күп булыуы шул хаҡта һөйләй. Ә ҡыҙ бала Нәсихә өләсәйҙе, әлбиттә, ситкә ебәреп уҡытып ултырмағандарҙыр, ул мотлаҡ ауылда белем алғандыр. Борон муллалар - ир балаларҙы, абыстайҙар ҡыҙ балаларҙы уҡытҡан. Уҡытырға урын булмаһа, берәй байҙың өйөндә булһа ла уҡытыу эше алып барылған. Тағы ла ул ваҡытта административ-территориаль бүленеш тә башҡа булған. Ғәлиәкбәр, хәҙерге ваҡыттағыса, төпкөл ауыл булып иҫәпләнмәгән, оло юл өҫтө булған. Халыҡ Ишембай районы Ҡолғона, Маҡар ауылы кешеләре менән тығыҙ аралашып йәшәгән. Стәрлелә, Хәбибназар, Әхмәтшаһ хәҙрәттәрҙең мәҙрәсәләрендә уҡыған шәкерттәр Ғәлиәкбәр аша үтеп йөрөгәндәр.

Ҡәйүм олатай, Алтыншиндар затынан Шәрифә исемле ҡыҙға өйләнеп, матур тормош ҡора. Был татыу ғаиләлә Кәримә, Хаммат, Ғәйшә, Самат, Әхәт, Барый, Ғилминур исемле балалар үҫә.

Алдынғы ҡарашлы, һәр эшкә лә маһир Ҡәйүм олатай ниндәй генә эшкә тотонһа ла, ауылдаштарын хайран иткән. Оҫта тегеүсе булған, өҫтөнә лә кейемде үҙе тегеп кейгән. Әүжән урыҫтарынан күп итеп картуф алып килеп сәскән. Темәстән тире йыйыу буйынса кеше кәрәк булғас, бер ни тиклем шунда тәғәйенләнеп эшләп йөрөй. Аҡыллы ир - ил ағаһы, ти. Ауылдаштары уға кәңәшкә йөрөгәндәр, олатай уларға кәрәкле документтар әҙерләргә ярҙам иткән, районда русса яҡшы белгән кеше булараҡ, аралашыу, алыш-биреш булһа, гел уны йөрөткәндәр. Бер ваҡыт Әтек, Иҫәнғазы башҡорттары менән Ҡана (Кананикольск) урыҫтары араһында ер өсөн низағ китә. Ыҙғышты яйға һалыу өсөн Ҡәйүм олатайҙы саҡыртып алалар. Олатайыбыҙ барып, халыҡ менән һөйләшеп, бәхәсте Әтек, Тарауыл халҡы файҙаһына хәл итеп ҡайта.

Оҫта ҡурайсы, халҡыбыҙҙың йырҙарын аһәңле, моңло итеп башҡарыуы менән дә дан алған Ҡәйүм олатай аҙан әйтһә, тауышы Таҡыясусаҡ, Суҡмуйыл яҡтарына тиклем яңғырап, ишетелеп, халыҡты Аллаһ йортона әйҙәп, саҡырып торған. Өйө лә мәсет тапҡырында булған. Киң күңелле, ҡунаҡсыл олатайыбыҙ кеше менән аралашыуҙы яратҡан, йома һайын ҡарттарҙы сәй эсергә саҡырған. "Етемдәр өҫтөнән күҙәтеүсе минең менән йәннәттә булыр", - тип әйтелә бер хәҙистә. Үкһеҙ етемдәрҙе, Нәжметдин бабай менән Ғәйшә инәй Әминевтарҙы, үҙенә тәрбиәгә алған. Ҡәйүм олатай был ике етем баланы үҙ балаһы һымаҡ көтөп, эйәле-башлы итеп, мал биреп сығарған.

Илебеҙҙә барған фажиғәле ваҡиғалар: граждандар һуғышы, берсә аҡтарҙың, берсә ҡыҙылдарҙың баҫып кереп, халыҡтың барлы-юҡлы ғына ризығын талап-тартып алып хәлһеҙләндереүҙәре, аслыҡ касафаты ауылыбыҙҙы урап үтмәгән. Бик күп кеше аслыҡтан ҡырылған. Үлгәндәрҙе ерләрлек тә хәлдәре булмаған ауылдаштарымдың. Мәйеттәрҙе бер урынға өйөп һалып торғандар. Һунынан илле-алтмыш кешене, бөтәһен бергә, Үсағүй йылғаһы буйына туғандар ҡәберлегенә ерләгәндәр. Ғәзиз яҡындарыбыҙ ерләнгән был ҡәбер ауылыбыҙ халҡының дәһшәтле, фажиғәле яҙмышының шаһиты икәнен белһен, онотмаһын, был матур тормоштон ерелдән генә бирелмәгәнен иҫендә тотһон ине йәш быуын. Шул ауыр йылдарҙа беренсе ауыл советы рәйесе вазифаһын Әминев Абдрахман олатай башҡарған, секретаре булып Ҡәйүм олатай эшләгән. Ауылда астарға ярҙам комитеты ойошторолған, халыҡҡа, аҙлап кенә булһа ла, иген тараҡтандар. Ана шулай осто-осҡа ялғап йәшәргә тырышып ятҡанда, тағы ла ҡара һөрөм булып, меңәр башты бер баш ашар золом йылдары башлана.

1929 йылда Нәжметдин бабай менән Ғәйшә инәйҙе - батрак, ә Ҡәйүм олатайҙы кулак итеп күрһәтеп, уны ауылдан һөрөргә булалар. Булған бит ул замандарҙа ла абруйлы, ҡыйыу, тура һүҙле сая ҡатындар! Уҫал Хәҙисә тип йөрөткәндәр ул өләсәйҙе.

- Һеҙ нимә уйлайһығыҙ? Күптәр үҙ балаларын аҫрай алманылар бит. Әбделҡәйүмдең балалары эшләгәндә, Нәжметдин менән Ғәйшә түрҙә ултырырға тейеш инеме? - тип, ҡаты асыулана уҫал Хәҙисә. Раскулачивать итергә килгән кешеләр уның фекерен тыңлап, ҡайтып китә.

Сәғитов Әхәт бабай һөйләгәндәрҙән: "1930 йылдың май айы ине. Ғәбитов Сафа бабайҙы ике ҡатыны, балалары менән оҙон арбаға ултыртып алып киттеләр. Әүжәндән урыҫтарҙы алып килеп, бөрмә башлы итеп өй төҙөткөйне. Тимер менән ябылған, буяулы матур өйө, бик күп умарталары ултырып ҡалды. Беҙ ни, бала-сағалар, йүгереп йөрөйбөҙ. Илаш - ҡысҡырыш. Ауыл халҡы илап оҙатып ҡалды. Атайымды районға саҡыртып алдылар, шул китеүҙән ҡайтманы ул, тотоп алып киттеләр. Бөрйәндә Бүребаев тигән бәндә күп кешенең башына етте, бер ғәйепһеҙ кешеләрҙе төрмәгә ебәреүсе лә шул. Гел наган тағып йөрөй торғайны. Ул ваҡытта саҡ бер нәмә булһа, кешене, милиция, тип ҡурҡытырҙар ине. Бына тигән 250 ир атылып, үлеп бөттөләр..."

"Көслө ҡурҡыныс түгел, үсле ҡурҡыныс", тигән боронғолар. Илен ҡурсалаусы ил ағаһы, башҡортомдоң сәсән телле моңло улы, "тамғалы ҡарағайы", дин әһеле, солоҡсо, бынамын тигән ғаилә башлығы, ете бала атаһы Сәғитов Әбделҡәйүм Сәғит улы, ун йылға хөкөм ителеп, 1932 йылдың 4 ғинуарында Мордовияла һәләк була.

...Бер китапта, Ҡөрьән-ҡарый тип, Ҡөрьәнде ете төрлө итеп уҡый белгән кешене әйтеүҙәре тураһында уҡығайным. Үҙе тураһында яҙған мәғлүмәттән күренеүенсә, Ҡәйүм олатай Ҡөрьән-ҡарый булған. Анау хәтле солоҡ ағастары эйәһенең, халҡыбыҙҙың моңло көйҙәрен һыҙып, артылмаған үрҙәре, тауҙары, кисеп сыҡмаған сая йылғалары, ятып һыуын эсмәгән селтер шишмәләре ҡалдымы икән! Бейек тауҙар өҫтөнә менеп, тыуған ягыбыҙҙың хозурлығына һоҡланып, төпһөҙ зәңгәр күктә ҡыйғыр бөркөттәрҙең көйәлеп осҡанын күҙәтеп торған саҡтары ла күп булғандыр олатайҙың. Яҙмыш тарафынан ҡыйырылып, һөйәктәре ситтә ятып ҡалған Ҡәйүм олатайҙың һәр балаһының тормош юлы беҙҙең өсөн үрнәк булып тора. "Халыҡ дошманы балалары" тигән мөһөр йөрөтһәләр ҙә, бирешмәгән улар, тырышып-тырмашып белем алғандар. Ҡәйүм олатайҙың ейән-ейәнсәрҙәре, бүләр-бүләсәрҙәре, тыуар-тыусарҙары - үҙе кеүек көслө ихтыярлы, рухлы заттар. Улар илебеҙҙең ҡайһы мөйөштәрендә, ниндәй генә өлкәлә хеҙмәт итмәйҙәр. Сәғитовтарҙың үҙҙәре тураһында ла ғына ла бер роман яҙырлыҡ. Ағас нәҫеле - ерҙә, ир нәҫеле - илдә шул.

**Шәһүрә ӘХМӘҘИЕВА.**
**Учалы районы.**
**(Аҙағы. Башы 4-се һанда).**

ҺАЙ, БАШҠОРТ АШТАРЫ!

**Бишбармаҡ - башҡорт халҡының яратҡан аш-һыуҙарының береһе. Уны һәр төбәктә төрлөсә бешерәләр. Бишбармаҡты табынға ҡуйғанда ла айырмалыҡтар күҙгә ташлана. Әбйәлилдәр өҫтәлендә лә был тәмле һәм туҡлыклы аш-һыу йыш "ҡунаҡ". Әбйәлилдәрсә бишбармаҡ әҙерләү серҙәренә төшөнөү маҡсатында Асҡар ауылында йәшәүсе оҫта хужабикә Сәлимә ҒӘЛИУЛЛИНАҒА мөрәжәғәт иттек.**



# ҺАЛМАНЫ ҮҘЕҢ БАҪ,

## ағас ҡалаҡ бир!

Бишбармаҡтың тәмлелеге хужабикәнең оҫталығына ғына түгел, ә бешереүгә һалған күңел йылылығына ла бәйле. Әгәр ҙә ихласлыҡ булмаһа, бишбармаҡ әҙерләүгә дәртләнеп тотонолмаһа, һәйбәт һөҙөмтә, тәмле аш өмөт итергә ярамай. Бишбармаҡты әҙерләү өсөн саҡырылған ҡунаҡтар иҫәбенә самалап ит алына. Унның сифатлы, бер аҙ майлыраҡ булыуы яҡшы. Шулай уҡ берәр киҫәк ҡаҙ ите ҡушып ебәреү бишбармаҡты тағы ла тәмлерәк итә. Бишбармаҡҡа тигән ит һүрән генә утта ҡайнарға тейеш, шул саҡта ул йомшаҡ, тәмле һәм һутлы булып бешә. Ит бешеп сыҡҡас та, тоҙлоғон алып, уға ваҡ ҡына итеп туралған һуған һалып, өҫтөн ябып, ситкә ҡуйып торабыҙ. Ошолай иткәндә һуған эсе тоҙлоҡта быҡып ҡына бешеп ултыра. Ҡаҙандан итте бушатып, һурпаһын һөҙөп, уға алдан әҙерләнгән картуфты, бер аҙҙан ҡырҡылған һалманы һалабыҙ. Улар әҙер булғансы, уртаса ҙурлыҡта итеп турап, итте әҙерләйбеҙ. Һалманың мотлаҡ өйҙә ҡырҡылғанын алыу мөһим. Магазиндан һатып алынған һалма бишбармаҡтың тәмен боҙа, уны бәсһеҙләндерә. Һалма күләме ике кешегә бер ус иҫәбенән алына. Һалма бер-береһенә йәбешмәһен өсөн, утты һүндергәс тә, кәстрүлгә ярты сынаяҡ тирәһе һалҡын һыу ҡойорға кәрәк.

Бишбармаҡты табынға ҡуйыуҙың да үҙ ҡағиҙәләре бар. Алдырҙарға (табаҡтан бәләкәйерәк һауыт) һалманы, унның өҫтөнә туралған ит һалып, һуғанлы тоҙлоҡ ҡойоп ултыртабыҙ. Бер алдыр биш-алты кешегә иҫәпләнә. Һәр кешегә кәсә һәм мотлаҡ ағас ҡалаҡ таратабыҙ. Бишбармаҡты тимер ҡалаҡ менән ашау унның йәмен ебәрә, күркен бөтөрә. Бишбармаҡ янына айырым һауыттарҙа ҡорот, тоҙ-борос ҡуйыла. Ҡайһы берәүҙәр тоҙҙо семтеп кенә һәр кешегә тапҡырлатып алдырға ла һалып сыға - былай эшләргә лә була, уныһы һәр кемдең үҙ ҡарамағында.

Беҙҙең яҡтарҙа "һоғондороу" йолаһы ла бар. Ул табынға эҫе һурпа бирер алдынан башҡарыла. Уға ярашлы, хужабикә ҡунаҡтарына бишбармаҡты үҙ ҡулы менән берәр ҡалаҡ ашатып сыға. Һоғондороуҙан баш тартырға ярамай, сөнки ул хужаларға ҡарата ихтирамһыҙлыҡ билдәһе һанала. Бишбармаҡ менән һыйланыу ҡоротло-борослo һурпа эсеү менән тамамлана. Һурпаны һәр кем алдына, эсеү-эсмәүен һорамайынса, ултыртыу мотлаҡ.

**ШУЛАЙ ИТЕП...**

**Бөгөн беҙ Әбйәлил районының урман-тау зонаһы хужабикәләре бешергән бишбармаҡтан "ауыҙ" иттек. Ә һеҙҙең ауылда бишбармаҡты нисек бешерәләр? Ошо хаҡта хужабикәләрҙән хаттар көтәбеҙ.**

**Гөлназ САФУАНОВА**
**яҙып алды.**

ХАТАЛАР ӨҪТӨНДӘ ЭШ

# ДИНҺЕҘ МЕНӘН ДИНДАР БӘХӘСЕ

## Кем ул кеше?




Был юлы ҡыйынлыҡтарҙың күберәк буласағын белеп, дуҫым былай тине:

- Кешелә йән булыуын, кеше үлгәндән һуң терелеүен, унның ерҙә тарҡалыу өсөн генә йәшәмәүен раҫлаусы дәлилдәр бармы? Ислам был турала нимә ти?

Бер аҙ уйланғандан һуң мин былай тинем:

- Һис шикһеҙ, был иң ҡатмарлы һорауҙарҙың береһе. Йән тураһында һөйләшеү буталсыҡлыҡҡа килтерә. Беҙҙә лә һеҙҙеге кеүек дәлилдәр аҙ. Әйҙә, бергәләп уйлашайыҡ. Йәндең барлығын раҫлаусы беренсе дәлил - кешенең ике төрлө тәбиғәткә эйә булыуы. Эйе, кешелә ике тәбиғәт бар: тышҡы, күҙгә күренерлек тәбиғәт - унның тәне, кәүҙәһе. Ул бөтөн матди сифаттарға эйә: тәнде үлсәп була, башҡалар менән сағыштырып була, ул ваҡыт үтеү менән үҙгәрә, хәрәкәт итә, бер хәлдән икенсегә күсә, ауырыу һөҙөмтәһендә лә үҙгәрә, ябыға, һимерә, тәсен үҙгәртә ала, йоҡлай йә иһә йоҡоһоҙлоҡтан яфалана, һалҡынды, аслыҡты һиҙә. Ошо матди тәбиғәтебеҙ менән бер рәттән, беҙҙә хистәр тәбиғәте лә йәшәй: яратыу, көйәфһеҙләнеү, ҡурҡыу, һыҙланыу, әсәрләнеү. Тәндән был тәбиғәтенең һәм унның менән бәйле төрлө һәләттәрҙең матди сифаттар менән билдәләнеүен белә тороп, беҙ кеше тәненең һәм унның органик йәненең икеһенең дә матдә-материя икәнлеген әйтә алабыҙ.

Әммә башҡа тәбиғәт тә бар - беренсеһенә ҡапма-ҡаршы һәм унан айырылып торған эске донъя тәбиғәте. Был тәбиғәт бөтөнләй башҡа сифаттарға эйә, ул тоторокло, ваҡыт йә урын тәьсире аҫтында үҙгәрмәй - был аҡылды һәм унның даими һәләттәрен, барлыҡ хис-тойғоларҙы берләштергән беҙҙең "мин"ебеҙ.

"Мин" - ул матдә түгел, асығыу-туйыуҙы һиҙгән йән дә түгел. "Мин" - бик тәрән, күләмле төшөнсә, ул киң мәғәнәгә эйә. Уға әйләнә-тирә мөхит хужа түгел, ул ҡиәфәтен үҙгәртмәй, ябыҡмай, һимермәй, ауырымай, ваҡыт тәьсиренә бирешмәй, унның үткәне, бөгөнгөһө һәм киләсәге юҡ. Ул ваҡыт үтеү менән юҡҡа сыҡмай. Беҙҙең аңлауҙа ул - мәңгелек һәм сикһеҙ.

Бында йәшәйештең ваҡыт тәьсиренә бирешмәгән, үҙгәрмәгән, күләме лә, ауырлығы ла булмаған, күҙгә күренмәгән башҡа төрө тураһында һүҙ бармай. Беҙ бынның даими йәшәйеш икәнен күрәбеҙ, унның ярҙамында матди донъялағы күсемле бөтә нәмәне танып беләбеҙ.

Беҙҙән: "Уларҙың ҡайһыһы кеше һуң? Кеше кем һуң ул - тәнме, йәнме?" - тип һорайсаҡтар. Материалистар, кеше - ул тән, тип раҫлай. Был дөрөҫ түгел. Ысынында тән - эйәреүсе, ә эйәртеүсе түгел, тән - үтәүсе, ә бойороусы түгел. Алла өсөн ураҙа тотҡанда тәнебеҙгә ризыҡ бирмәй торабыҙ. Тәндә теләктәр тыуғанда, уларҙы йүгәнләйбеҙ. Тәнебеҙ йоҡларға теләгәндә лә, иртәнсәк торабыҙ. Тән аҡыл бойороҡтарын үтәп, аҡыл төҙөгән программа буйынса йәшәй.

Һуғыш ваҡытында кеше үҙенә гранаталар аҫып, дошман танкы аҫтына ташланған. Бында йән күҙ асып йомған арала тәндә юҡ итергә ҡарар сығара, һәм тән быға ҡаршы килә алмай. Әлеге хәл кеше тәбиғәттең ҡайһыһы өҫтөнөрәк икәнлеген, ҡайһыһы кеше икәнлеген асыҡ күрһәтә.

Кеше тәнен тарҡатып та була: бер ағзаны киҫеп алырға була, айырым ағзаларын алыштырып, батарейкалар, ҡаҙаҡтар, алюмин киҫәктәре ҡуйып, һалма күҙ, аяҡ-ҡул, сәс, йөрәк ҡуй - кеше иҫән. Сөнки кеше - тән киҫәктәре түгел, кеше - унның йәне, ул рулдә үҙ ҡулында тота һәм тән исемле "машина" менән идара итә.

Йән - баш мейеһе күҙәнәктәренән килгән идара, тик баш мейеһенең үҙенән түгел.

Йәғни кешелә ике йәшәйеш бар: төп һәм хаким - йән, икенсеһе иһә - тән. Улем менән тән юҡҡа сыға, ә мәңгелек йән мәңгелеккә китә. Тән тупраҡҡа әйләнә, асылына ҡайта, ә йән ғаләм менән ҡушыла.

**"Динһеҙ менән бәхәс" китабынан.**
**(Дауамы бар).**

УҢЫШ ҠАҘАН



# НИ ӨСӨН ҺЕҘ АУЫРЫУ ҺӘМ ЯРЛЫ?

## Ҡорбан комплексынан ҡотолоғоҙ

Шулай уҡ баҡсаһы сүп үләндәрен утап, үҙенең участкаһын тәрбиәләгән кеүек, һеҙгә лә үҙегеҙҙең аң баҡсағыҙ тураһында хәстәрлек күрергә, унан ярлылыҡ, сикләүҙәр тураһындағы һәм башҡа кире уй-фекерҙәрҙе утап торорға кәрәк буласаҡ. Унда бары тик бәхет, уңыш, тормоштағы маҡсатығыҙ хаҡында фекерҙәр генә сәсергә тейешһегеҙ.

Әгәр шундай баҡсасылыҡ менән шөғөлләнә башлаһағыҙ, тиҙҙән үҙ бәхетегеҙ үҙ ҡулығыҙҙа, характерығыҙҙы нығытыусы, шәхси торошоғоҙҙо булдырыусы, яҙмышығыҙҙы хәл итеүсе фекерҙәргә өҫтөнлөк бирһәгеҙ, һеҙ - хәл-тороштоң ҡорбаны түгел, ә унның архитекторы һәм төҙөүсеһе икәнлеген тәрән аңларһығыҙ.

Тышҡы хәл-торош һәм тормошта урап алған мөхит туранан-тура эске торошоғоҙға бәйле. Иң мөһиме, уңыш, бәхет тураһында һүҙ йөрөткәндә, фекер һәм характерҙың берҙәм булыуын аңлау мөһим.

Күпселек кеше кеүек фекер йөрөтһәгеҙ, үҙегеҙгә аҡланыуҙар эҙләй башлайһығыҙ. Һеҙ минең әле генә әйткәндәрем менән тулыһынса килешһәгеҙ, әммә барыбер, үҙегеҙ ҙә һиҙмәҫтән, ғәйебегеҙҙе йомшартырлыҡ хәл-торош ҡорбаны икәнегегеҙгә инанаһығыҙ.

Кеше бер ваҡытта ла юҡҡа ғына төрмәгә йәки дауаханаға эләкмәй, банкротҡа әйләнмәй. Барлыҡ бындай хәл-торош йөҙҙәрсә мең фекер барышында ҡабул ителгән меңдәрсә ваҡ шарттан барлыҡҡа килә. Әгәр һин тормошоңда ҡуҙәтелгән ваҡиғалар өсөн тулыһынса үҙеңә яуаплылыҡ алһаң, йүнәлешеңде үҙгәртеп, һәр ваҡыт хыялланған тормош менән йәшәү власына эйә икәнлегеңде аңлайһың.

